*Тәбиғәт кешегә иҫ китмәле һәләт биргән - ул тиҫтәләрсә тел өйрәнә ала. Быны менән файҙалан, төрлө телдәр өйрән, һөйләш, аралаш, тик былар тыуған телеңде онотоу иҫәбенә булмаһын, тигән фекер һалған зиһенебеҙгә.*

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№8 (426)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙҙәге татыулыҡ тамыры...**

башҡорттоң толерантлығында



2

**Колхоз ожмах тойолор ҙа...**

тик ул саҡта һуң булыр



8-9

**Ир һәм ҡатын**



10

**Телһеҙ шиғриәт ул...**

башҡорт бейеүе



13

14 **ТВ-программа**


БАЙРАМ УҢАЙЫ МЕНӘН

# ИРМЕН ГЕНӘ ТИГӘН, АЙ, ИР-ЕГЕТ

## Һүҙ тейҙермәҫ ғәзиз халҡына...

**Башҡорт халыҡ йырҙарында ир-егетлек, азаматлыҡ тойғоһо һәр саҡта ла тыуған илгә тоғролоҡ, намыҫ төшөнсәләре менән ауаздаш булған. Байрам көнөндә шул һүҙҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрмәксебеҙ, хөрмәтле ир-егеттәр.**



*Нағышлы ла билбау билгә быуһаң,*
*Буяуҙары сыға биленә.*
*Егет кенә булһаң, хеҙмәт күрһәт,*
*Исемдәрең ҡалһын иленә.*

*Ҡарағайҡай тигән бейек ағас*
*Ыҙғыр елдәргә лә бирешмәй.*
*Ирмен генә тигән ир-егеткә*
*Башты түбән эйеү килешмәй.*

*Алыҫтарҙан, ай, күренгән*
*Ирәндеккәй тауының аҡ ташы,*
*Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы.*

*Ыласынҡай тигән, ай, ғорур ҡош*
*Ҡош ҡундырмай ағас башына.*
*Ирмен генә тигән, ай, ир-егет*
*Һүҙ тейҙермәҫ ғәзиз халҡына.*

*Санаға еккән ҡара аттың*
*Арт аяғы уның аҡ булыр,*
*Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә,*
*Ҡылған эше уның хаҡ булыр.*

*Шарҙурманға инһәң, һыҙғырып ин,*
*Тыңламаған ҡоштар ҡалмаһын.*
*Егет саҡтарыңда булдыҡлы бул,*
*Һоҡланмаған кеше ҡалмаһын.*

*Йәмле генә Урал буйҙарында*
*Ҡымыҙлыҡтан йыуан да йыуа бар.*
*Егет кенә саҡта әрмеләрҙә*
*Хеҙмәт итеү тигән дә йола бар.*

*Йырсыларға ҡалыр йырым,*
*Ҡомартҡыға ҡалыр ҡылысым,*
*Миндәй генә булып та ирҙәр тыумаҫмы?*
*Дошмандарҙан үсемде лә минең алмаҫмы?*

АФАРИН!

**2006 йылдың май айында Грецияның Афины ҡалаһында косики каратэ буйынса Бөтә донъя чемпионатында Өфө егете еңеп сыға. Артабан ул Берлинда үткән ярышта ла Европа чемпионы исемен яулай. Былтыр 19 декабрҙә Салауат шул уҡ Берлинда үткән Европа чемпионатында АҠШ-тан, Израилдән, Польшанан, Францияnan, Алжирҙан килгән иң көслө үҫмерҙәр араһында 63 кг-ға тиклемге ауырлыҡ категорияһында ике алтын миҙал яулай. Европа чемпионы Салауат Ильясов менән осрашып, уға ҙур спортҡа нисек аяҡ баҫыуы, Рәсәйҙә спорттың үҫеш потенциалы, егеттең донъяға ҡараштары һәм уның йәшәү рәүешенә әйләнгән косики-каратэ тураһында һорауҙар бирҙек.**



# ТУЛЫ ҠАНЛЫ ЙӘШӘҮ...

## спорт менән дуҫ булыу ул

**➔ Берәй эште башҡарыу өсөн ниндәйҙер шарттар, сәбәптәр кәрәк. Берлиндағы Европа чемпионатында еңеп сығыуында тренерҙарыңдың өлөшө барлығы бәхәсһеҙ. Шулай ҙа, тағы ла ниндәй шарттар һине еңеүгә алып килде?**

- Беренсенән, әсәйемдең һәм ҡустымдың ышаныслы таянысын тойҙом. Уларҙың кәңәштәрен, изге теләктәрен хәтерҙән сығарманым. Һәр спортсыға хас булғанса, минең дә үҙемдең күнекмәләр һәм тәғәйен ял ваҡыттарым бар. Режимға өйрәнгәнмен. Уҡыу йылы башланыу менән һуңғы өс ай дауамында Волга буйы федераль округы ярышына, Рәсәй һәм Европа чемпионаттарына ныҡышмалы әҙерләндем. Аҙнаһына бер көн - йәкшәмбе генә ял итә инем. Ҡайһы саҡтарҙа кәйефемә ҡарап ял көнөмдә лә шөғөлләндем. Оҙайлы күнекмәләр еңеүемдең шулай уҡ төп шарты, тип уйлайым.


Дауамы 5-се биттә.

ИҒТИБАР!

# АЙЫҠ ТУЙ СЦЕНАРИЙЫ ЯҘЫП, конкурсыбыҙҙа ҡатнаш!

**Хәбәр ителеүенсә, республикала "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт, Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты иғлан иткән "Айыҡ ауыл" конкурсы старт алды. Унын маҡсаты - эскелеккә, эскән кешеләргә ҡаршы көрәшеү түгел, ә айыҡлыҡ өсөн көрәшеү, республика халҡы араһында айыҡлыҡ традицияларын тергеҙеү, йәштәр араһында айыҡлыҡты модаға индереү.**

Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та бер хәл күҙәтелә йәмғиәттә: йәштәребеҙ айыҡ тормошто, айыҡ туйҙарҙы, айыҡ йәшәү рәүешен яҡлай, әммә өлкәндәр был инициативаны күтәрә һалып бармай. Гәзитебеҙҙең былтырғы 47-се һанында түңәрәк ҡорҙа фекер алышҡан йәштәребеҙҙең береһе ошолай тигәйне: "Бөгөн күп кенә йәштәр туйҙарын да спиртлы эсемлектәрһеҙ үткәрә. Улар эскеһеҙ ҙә матур байрам ойоштороуға мөмкин булыуын яҡшы аңлай. Тыпырҙатып бейей, гитара, ҡурайға ҡушылып йырлай. Айыҡ аҡыл менән бер-береһен ҡотлайҙар. Был - юғары кимәл. Һәм йәштәребеҙ араһында айыҡлыҡ модаға әйләнеп бара. Тик ата-әсәләр араһында ошоно ҡабул итмәүселәр бар. Уларҙың быуыны икенсерәк шул. Нисек инде туйҙы эскеһеҙ үткәрергә була, кеше ни әйтер, тип уйлай улар. Ә шулай ҙа айыҡлыҡ һәм айыҡ йәштәребеҙ өҫкә сығыр, был мода киләсәк тормошобоҙҙа нығыныр, йәшәүебеҙ нигеҙенә әйләнер, тип ышанам..."

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, эскелек ата-әсәләр тарафынан әлегә тулыһынса инҡар ителмәгән. Шуға ла йәштәр күңелендә ата-әсәләре, өлкән быуын алып барған тормошҡа протест тойғоһо уяна. Һәр хәлдә, оло быуынға сәләмәт тормош буйынса үҙ дәғүәләрен белдерерлек йәштәребеҙ бар хәҙер. Бәлки, яҡшы күренештер был...

Берәү ҙә үҙ балаһына яуызлыҡ теләмәй. Кем генә булмаһын - балаһын һау-сәләмәт кеше итеп тәрбиәләргә тырыша. Әммә бик һирәктәр генә үҙҙәре яҡшы өлгө күрһәтә ала...Тимәк, өлкән быуын да үҙгәрергә тырышырға, шулай уҡ айыҡлыҡты мода итеп алырға тейеш.

**Шулай итеп, "Киске Өфө" гәзит уҡыусылар араһында быйылғы йылды "Айыҡлыҡ өсөн көрәш йылы" тип иғлан иткәйне инде. Тимәк, һәр беребеҙ ошо хәрәкәткә хуплауҙарыбыҙ, теләктәшлек күрһәтеүебеҙ, аныҡ эшебеҙ менән ярҙам итергә тейешбеҙ. Ә хәҙер беҙҙән аныҡ тәҡдим: айыҡлыҡҡа тәүге юл -йәштәребеҙҙең туйын эскеһеҙ үткәреү. Быныһын һәр ата-әсә, һәр өйләнешеүсе йәштәр һис бер ауырлыҡһыҙ тормошҡа ашыра ала. Уларға ярҙамға килеп, "Айыҡ туй сценарийы" тигән конкурс иғлан итәбеҙ. Сценарий халҡыбыҙҙың матур туй йолаларына нигеҙләнеп, заманса уйындар, йырбейеү, күңелле тамашалар менән үрелеп барырға тейеш. Конкурста ҡатнаша алырҙай сценарийҙар гәзитебеҙ биттәрендә баҫыласаҡ. Ә иң яҡшы авторҙар ҡиммәтле бүләктәребеҙгә лайыҡ буласаҡ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ИШАРА

**Башҡортостанда халыҡтар араһында ныҡлы дуҫлыҡ йәшәп килеүенә аҡыллы кеше шик белдермәҫ, моғайын. Ләкин шул уҡ ваҡытта миндә һорау тыуа: ғаилә ағзалары араһындағы дуҫлыҡ тураһында һөйләргә мөмкинме һуң? Ғаилә ағзаларына ҡарата, ғәҙәттә, улар тыныслыҡ һәм татыулыҡта йәшәй, тип әйтелә.**

# БЕҘҘӘГЕ ТАТЫУЛЫҠ ТАМЫРЫ...



## башҡорттоң толерантлығында

Халыҡтар, этностар һәм уларҙың вәкилдәренә ҡарата хәҙерге лексиконда толерантлыҡ, дин иреген таныу (веротерпимость) кеүек төшөнсәләр ҡулланыла. Сит илдәрҙән килеп ингән бындай терминдар рәсәйлеләр мөнәсәбәттәренең асылын сағылдыра алмай барыбер: был һүҙҙәрҙән һалҡынлыҡ, битарафлыҡ, хатта әҙәпһеҙлек бәрелеп торғандай.

Дуҫлашырға, дуҫ йәшәргә була, мәҫәлән, күршеләрең менән. Ә Башҡортостан Республикаһы халыҡтары, милләттәре һәм этностары күршеләргә ҡарағанда күптән инде мөнәсәбәттәрҙең юғарыраҡ баҫҡысына күтәрелде. Республикабыҙҙа милләт-ара һәм конфессия-ара татыулыҡ юғары кимәлдә тип баһаларға мөмкин, бында күпме йылдар йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, бөтә граждандар ҙа үҙҙәрен өйөндәге кеүек хис итә.

Тәбиғи һорау тыуа: төбәктәге татыулыҡ һәм тыныслыҡтың тамырҙары ниҙә? Беренсеһе, ләкин берҙәнбер фактор түгел - ул төп этностың, башҡорттарҙың иҫ киткес тыныслыҡ һөйөүсе халыҡ булыуы. Үткән быуаттарҙағы рус тикшеренеүселәренең бөтәһе лә тип әйтерлек башҡорттарҙың тап ошо сифатын юғары баһалаған.

Күп быуатлыҡ тарихында башҡорттар бер генә тапҡыр ҙа баҫҡынсылыҡ яуы алып бармаған. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер авторҙар башҡорттарҙың киң күңелле, ҡунаҡсыл булыуын ғына түгел, ә ҡыйыу һәм һуғышсан булыуын да билдәләгән. Тәү ҡарашҡа был сифаттар көтөлмәгән парадоксаль тойғо тыуҙырыуы ихтимал, ләкин бында бер ниндәй ҙә ҡапма-ҡаршылыҡ юҡ. Эш бары шунда: урындағы башҡорт халҡы тыныс, изге маҡсат менән килгәндәргә фәҡәт ҡунаҡсыллыҡ күрһәткән. Ә инде ҡылыс тотоп килгән татар-монголдар, мәҫәлән, 15 йылға һуҙылған һуғыштан һуң ахырҙа башҡорттар менән тыныслыҡ тураһында килешеү төҙөргә мәжбүр була.

Шундай бер феноменды ла айырып әйтеп китке килә: ике быуат ярым буйына аҫабалыҡ, дини һәм башҡа хоҡуҡтары өсөн туҡтауһыҙ ихтилалдар алып барыуҙарына ҡарамаҫтан, башҡорттар бер үк ваҡытта Рәсәй дәүләте башҡа илдәр менән алып барған бөтә һуғыштарҙа ла әүҙем ҡатнашҡан.

Этнос характеры, унын фиғелхолҡо башҡорттарҙың бай эпостары, риүәйәт-легендалары, мифтары донъяһына барып тоташа. Был тәү сығанаҡтарҙың күпселеге йоғонтоло тәрбиәүи көскә эйә генә түгел, ә фәлсәфәүи ҡараш, донъяға дөйөм мөнәсәбәт булдырыуҙа ла төп әһәмиәткә эйә. Халыҡта ул тәбиғәт йоғонтоһонда һәм унын менән айырылғыһыҙ берлектә хасил була. Ә был иһә этностың холоҡ-фиғелендә, менталитетында сағылыш таба. Ошо йәһәттән башҡорттарҙың рустар менән бик күп оҡшашлығы бар. Был уртаҡлыҡ оҙайлы йылдар бергә йәшәү һәм үҫешеү осоронда көсәйә генә бара һәм ул төп этнос характерына ҡарағанда ла мөһимерәк фактор.

Уртаҡ ерҙә көн иткән халыҡтарҙың әкренләп дөйөм ҡараштары барлыҡҡа килә, характерҙары яраша, уртаҡ йорт - киң мәғәнәлә экология (иҡтисади, тәбиғи, мәҙәни, психологик һәм башҡа компоненттарҙы ла ҡушып) тәьҫире булараҡ, оҡшаш холоҡ-фиғел формалаша бара. Башҡортостан халҡының уны хатта яҡындағы күршеләренән айырып торған ҡайһы бер һыҙаттарын әйтеп китергә була. Иң тәүҙә ул тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәттә күренә. Торатау һәм Ирәмәл тауҙары аҡтарылыу, таланыу ҡурҡынысы аҫтында ҡалғас, урындағы халыҡтарҙың нисек борсолоуын хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ әле! Милләтенә ҡарамайынса, һәр кем был мәсьәләлә граждандыҡ әүҙемлеге күрһәтте. Ни тип әйтерһең инде, башҡорт тәбиғәте өсөн һәр кем йөрәгендә ғорурлыҡ йөрөтә.

Икенсенән, был хужалыҡ итеү нигеҙҙәре һәм иҡтисади төшөнсәләр. Республиканан ситкә - теләһә ниндәй йүнәлешкә сығыуын була, юл буйы сауҙаһы башланыуын күрәһең. Нимә генә һатмайҙар унда, башлыса Ҡытай тауарҙарын, әлбиттә. Ә Башҡортостанда бындай күренештәр һирәкләп осраған хәлдә лә, ул бал, ит, картуф, еләк-емеш кеүек халыҡтың үҙ ҡулдары менән етештергәнде һатыуға ҡайтып ҡала, был әҙер продукция менән алыпһатарлыҡ шөғөлө түгел инде.

Артабан. Ауылдарыбыҙға күҙ һалығыҙсы: башҡортмо, урыҫмы, татар йә сыуаш ауылымы - айырма юҡ. Күрше-тирә төбәктәрҙеке менән сағыштырғанда беҙҙең ауылдар төҙөклөгө яғынан бер башҡа юғарыраҡ тора. Был иһә Башҡортостан халҡының был ергә ваҡытлыса килмәүен, ә ошонда үҙен ысын хужа итеп күреп, үҙе, ғаиләһе һәм ейән-ейәнсәрҙәре өсөн яуаплылыҡ тойоп йәшәүен дәлилләй. Бынан алдағы һөйләмдә мин "Башҡортостан халҡы" тигән төшөнсәне аңлы рәүештә ҡулландым. Һәр береһе үҙ холҡо, тарихы, йолалары һәм мәҙәниәтенән торған төрлө этностар булыуға ҡарамаҫтан, ул беҙҙә берәү. Һәйбәт ғаиләләгесә, был төрлөлөк бер-берендә ихтирам итеп, аңлашып, татыу йәшәүгә һис тә ҡамасауламай.

Күршеләрҙән ундыҡ, тип әйтә алам. Бына кемдәрҙән ниндәй тәжрибә үҙләштерергә, ярышырға мөмкин, исмаһам. Тотош алғанда, Башҡортостан ҙур ғаиләгә - унын төҙөлөү сығанағы башында беҙҙең дә республикабыҙ торған Рәсәй Федерацияһына инә. Бәләкәй ғаилә - Башҡортостандағы этнос-ара һәм конфессия-ара тыныслыҡ һәм татыулыҡ ҙур ғаиләбеҙ - Рәсәй киләсәгенең асыҡ сағылышы ул.

**Ҡадир МӘҒӘФҮРОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Һуңғы йылдарҙа "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә талантлы йәштәргә премиялар биреү ҙә матур йолаға әүерелде. Бына әле Конгресс-холда Башҡортостандың иң аҡыллы, иң уңышлы, иң талантлы йәштәре БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина ҡулынан ошо бүләктәрҙе алып ҡыуанды. Был юлы Рәсәй кимәлендәге был премияға Башҡортостандан 127 йәш кеше лайыҡ булды. Улар араһында Ишембайҙың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се республика башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәсилә Хисмәтуллина ла бар. Ул был премияға "Урал батыр" конкурсында еңеп сыҡҡаны өсөн лайыҡ булған.

✓ Был көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетында булып үткән түңәрәк ҡорҙа республика урмандары менән файҙаланыу мәсьәләһе күтәрелде. Һөйләшеү барышында республикала йомшаҡ сортлы ағасты эшкәртеү предприятиелары бөтөнләй булмауы, ағасты Башҡортостандан ситкә сығарыу һәм урман эшселәренең үҙҙәренә беркетелгән участкала тәбиғәтте һаҡлау эштәре менән шөғөлләнмәүе кеүек мәсьәләләр тикшерелде.

✓ БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡабул иткән өлкән йәштәге кешеләрҙең тормош сифатын үҫтереүгә йүнәлтелгән республика программаһы 2011 - 2013 йылдарға иҫәпләнгән. Унда өлкән йәштәге кешеләрҙе тәрбиәләү буйынса хеҙмәттәр системаһы, уларҙы "өсөнсө быуын халыҡ университеттарында" уҡытыу, ашығыс медик-социаль хеҙмәт күрһәтеү, социаль телефон, социаль туризмды үҫтереү, тештәрҙе льготалы протезлау, социаль магазиндар селтәрен киңәйтеү ҡаралған. Әле тештәрҙе льготалы протезлау буйынса БР Финанс министрлығы менән һөйләшеүҙәр алып барыла, сөнки был хеҙмәт бик ҡиммәт тора. Шулай ҙа был ярҙам менән республиканың иң ярлы пенсионерҙары ла солғап алынасаҡ.

✓ 10 мартта "Баштехинформ" үҙәгендә БР Фәндәр академияһы "Бал ҡорто. Бал. Умарта -2011" III махсуслаштырылған күргәҙмә-форум үткәрә. Маҡсаты - умартасылыҡта заманса инновация технологиялары индереү, белгестәрҙең үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыуы, шулай уҡ бал ризыҡтарын күрһәтеү һәм һатыу.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЯБАЙ ХАЛЫҠ АРАҺЫНДА...

## милли күрәлмаусылыҡ юҡ!

**Гәзитебеҙҙең үткән һанында ошо биттә БР Президентының интернеттағы блогынан илдәге милләт-ара татыулыҡ һәм ксенофобия тураһындағы фекерҙәрҙе күсереп баҫҡайныҡ. Беләһегеҙ, был тема Мәскәүҙең Манеж майҙанындағы ваҡиғаларҙан, йәштәрҙең "Рәсәй - рустар өсөн!" тигән лозунгыларынан һуң ҡалҡып сыҡҡайны. Үткән аҙнала Өфөлә үткәрелгән Дәүләт Советы Президиумы ултырышы ла ошо уҡ темаға - милләт-ара татыулыҡ һәм ксенофобия темаһына арналды. Һәр хәлдә, был теманың Рәсәй кимәлендә яңынан күтәрелеүе, шул һөйләшеүҙәрҙе алып барыуға сәбәптәр булыуы барыбер ҙә борсоуға һала. Милләт-ара күрәлмаусылыҡ тигән нимә онотолдо, йәмғиәтебеҙҙә ул күренеш юҡ, тигән фекергә күнеп бөткәйнек бит инде. Унда-бында милләтте исемләп бит тырнашыуҙар ҙа әллә ни ҙур трагедияға әйләндерелмәй ине: бер ғаилә балалары араһында ла ундай ғына талаш-тартыштар булып тора.**

Әллә, БР Президенты блогында күптәр яҙғанса, яһалма рәүештә тыуҙырыламы был тема? "Халыҡ араһында милләт мәсьәләһе күтәрелмәй, - тип яҙа Laisr.- 65 йыл йәшәү дәүеремдә, ҡайҙа ғына йәшәһәм дә  милләт-ара мәсьәлә менән осрашманым. Ниңәлер был мәсьәлә өҫтә күтәрелә. Өҫтән аҫтағыларға төшә". Тағы бер яҙма: "Республиканың күп милләтле халҡының күпселеге өсөн милләт-ара проблемалар юҡ, - ти gimranov54. - Тарих беҙгә "проблема тыуҙырған килһә - уны әйтеп бир" тигән ҡағиҙәне бер тапҡыр ғына раҫламаны. Заманында М. Горбачевҡа БДБ төҙеү темаһын ырғыттылар ҙа, СССР-ҙы таркаттылар, ә яңы союз төҙөмәнеләр. Һөҙөмтәлә нимә барлыҡҡа килгәне барыбыҙға ла мәғлүм. Яһалма рәүештә милләт-ара проблема тыуҙырмаһаҡ ине".

Ә шулай ҙа был тема ҡуйыртылғандан ҡуйыртыла бара. Үҙәк гәзиттәрҙә, Үҙәк телеканалдарҙа, интернетта. Гәзиттәрҙә баҫылған йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү мәғлүмәттәре лә уйландыра. Бына, мәҫәлән, үткән аҙнаның "Аргументы и факты" гәзитендә (№7) ошондай мәғлүмәттәр килтерелде. "Граждандарҙың 47 проценты (ВЦИОМ) 2010 йылда илдә милләт-ара мөнәсәбәттәр насарланды, тип яуап бирә. Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 37 проценты (ФОМ) Рәсәйҙең "күп милләтлегеге" зыяндан башҡа файҙа килтермәй, ә 24 проценты теге йәки был милләткә ҡарата асыу һәм күрә алмаусылыҡ йөрөтә, ти. Левада-үҙәк мәғлүмәттәре буйынса һорауға яуап биреүселәрҙең 56 проценты милли нигеҙҙә ҡумәк ҡан ҡойошло бәрелештәр булыуы мөмкин тип иҫәпләй".

**Әйткәндәй, гәзиттең ошо уҡ һанында ике сәйәсмән Рәсәйҙәге милләт-ара мөнәсәбәттәр һәм ксенофобия күренештәре тураһындағы ҡапма-ҡаршы фекерҙәре менән уртаҡлаша. Уларҙы беҙ гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

### Рустар беренсе булырға тейеш!

**Игорь Лебедев, РФ Дәүләт Думаһында ЛДПР фракцияһы рәйесе:** Ҡайһы бер милли республикалар - айырыуса Төньяҡ Кавказдағылар бойондороҡһоҙ дәүләттәргә әүерелде, уларҙағы төп милләттәр илдең башҡа граждандарына ҡарағанда күберәк хоҡуҡтарға эйә. Уларҙың үҙ Конституциялары бар, улар күплән чиновниктар үрсетеп ята. Ләкин улар Үҙәктән Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәренә ҡарағанда байтаҡҡа күберәк бүленгән дотация иҫәбенә йәшәй. Бюджетты тикшергән ваҡытта беҙ шундай тигеҙһеҙлекте күрәбеҙ һәм хөкүмәттән был турала аңлайышлы яуап ала алмайбыҙ. Яңыраҡ Иҫәп палатаһы хәбәр итеүенсә, унда ебәрелгән аҡсаның яртыһы нимәгә тотонолоуы билдәһеҙ!

Яңырак законға үҙгәреш индерелде - республика башлыҡтарын президент тип атау туктатылды. Беҙ үҙгәрештәрҙе артабан дауам итергә кәрәк, тип иҫәпләйбеҙ. Иң тәүҙә илдең административ-территориаль бүленешен үҙгәртеү кәрәк, юғиһә, ул совет замандарынан бирле милли билдәләнеш буйынса йөрөтөлә: Татарстан Республикаһы түгел, ә Ҡаҙан губернаһы һ.б. булырға тейеш. Төбәктәр сиге шундай итеп үҙгәртелергә тейеш, унда бер генә милләттән торған төбәктәр бөтөнләй булмаһын. Юғиһә, экстремистар ғүмер буйына сепаратизм темаһын, теге йәки был республиканың айырылып сығыуы хаҡындағы темаһын күтәрәсәк. Федерация субъекттарының үҙ Конституциялары булырға тейеш түгел. Конституция илдә берәү генә була. Ул ғына ла түгел, Төп законға түбәндәгесә төҙәтмә индерергә кәрәк: "Беҙ, Рәсәй Федерацияһының күп милләтле халҡы", тигән урынға "Беҙ, рустар һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа күп милләтле халҡы", тип яҙырға кәрәк. "Рәсәй халҡы", "рәсәйле" - бындай милләт юҡ ул. Илдең күпселеген тәшкил иткән рустар һәм башҡа милләттәр бар. Юридик яҡтан был бер ни ҙә бирмәҫ, бөгөн был әхләҡ күҙлегенән мөһимерәк.

Ҡайһы бер төбәктәрҙә шундай йәшерен генә талаптар йәшәп килә: берәй вазифаға фәҡәт урындағы төп милләт вәкилдәре генә үрләтелә. Борондан рус булған көньяҡ төбәктәрҙә күрше республикаларҙан килеүселәр күп. Беҙҙә рус төбәктәрендә халыҡтарҙың алмашыныуы борсой. Мәҫәлән, Ставрополье рустарына бөгөн бик еңелдән түгел. Шул уҡ ваҡытта ситтән килеүселәр етксе вазифаларға үрләй, шунда уҡ туған-тумасаһын урынлаштыра, хоҡуҡ һаҡлау, суд системаһы органдарына үтеп инергә ынтыла.

Беҙ ил эсендә граждандарҙың күсенеп йөрөүен сикләү мөмкиндер, тип уйлайбыҙ. Һис юғында, быны берәйһенең террор эшмәкәрлегенә мөнәсәбәте хаҡында мәғлүмәт булғанда эшләргә мөмкин. Бынан тыш, беҙ кешеләрҙе ҡунаҡта үҙҙәрен ҡунаҡтарға хас тоторға мәжбүр итергә тейешбеҙ. Тәүҙә координация советы төҙөргә кәрәк, ул ситтән килгән студенттарға тиҙерәк өйрәнеп китеүгә, вуздарҙағы конфликттарҙы бөтөрөүгә булышлыҡ итергә тейеш.

Һәм һуңғыһы: рус халҡының берләшеүе милли идеяға әүерелергә тейеш.

### Эш милләттә түгел

**Владимир Рыжков, "Выбор России" йәмәғәт хәрәкәте рәйесе:** Рәсәй империяһы губерналарға бүленгән булғайны инде. Мәҫәлән, Тифлисс губернаһына Грузия ла, Әрмәнстан да индерелгән булған. Коммунистар иһә төп лозунгыларҙың береһе итеп милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын күтәреп сыҡты. Илде теге йәки был милләт йәшәгән сиктәр буйынса бүлеп сыҡтылар. Күп һанлы милләттәрҙең бөтәһе лә республика йә автономия алды, хәҙер уларҙың унда 3-4-се быуыны йәшәй. Хәҙер Башҡортостан Республикаһынан - Өфө өлкәһе, ә Чечен Республикаһын Грозный крайы яһауҙан нимә үҙгәрәсәк һуң? Кешеләр бит унда шул уҡ ҡаласаҡ. Ә административ-территориаль сиктәрҙе үҙгәртеү яңы этник конфликттарға алып киләсәк. Кавказ тураһында ғына һүҙ бармай. Бүрәт республикаһын Улан-Удэ йәки Иркутск өлкәһенә күсереүгә маташыу, һис һүҙһеҙ, унда сепаратизм күтәрелешенә сәбәп буласаҡ, ә Яҡутстанды "бөтөрөү" яҡуттар тарафынан йәберләнеү һымаҡ ҡабул ителәсәк.

Ике тиҫтәләп милли республикала сепаратизм ялҡыны ҡабынасаҡ. Федератив сәйәсәтте бындай "унификациялау" ябай булып күренһә лә, ахыр сиктә, ул илде таркатыуға тағы ла көслөрәк тәьҫир итәсәк.

Граждандар хоҡуҡтарын бындай сикләүҙәр хәлде киҫкенләштереүгә һәм экстремизм үҫешенә алып киләсәк. Дәүләт аппаратының тарҡалыуы шарттарында бындай сикләүгә контроллек итеү мөмкин түгел.

"Рәсәй - рустарға" лозунгыһы, асылда, Рәсәйҙе Кавказ һәм Себерҙән айырып, XVI быуат сиктәренә ҡайтыуға саҡырыу ул. Әгәр беҙ илде һаҡлап ҡалырға теләһәк, объектив процестарҙы иҫәпкә алырға бурыслыбыҙ. Мәҫәлән, демографияны. Рустарҙың балалары әҙ һәм улар араһында үлем кимәле юғары. Рус төбәктәрендә ситтән килеүселәр арта барасаҡ. Шул иҫәптән, федераль властарҙың йомшаҡлығы арҡаһында законһыҙлыҡ төбәгенә әйләнгән урындарҙан да халыҡ ағыласаҡ. Сөнки унда ла ябай халыҡтың хоҡуҡтары ҡыҫылыуға дусар ителә.

Дәүләт ҡоролошо, власть менән йәмғиәттең бер-береһенә кәмһетеүле мөнәсәбәттәре арҡаһында бөтә ил буйынса миллионлаған граждандар үҙҙәрен ҡыйырһытылған хәлдә тоя. Рустарҙы Ҡыҙыл китапҡа индерергә һәм Конституцияға йәбештерергә кәрәкмәй. Илдә рустар күпселек. Төп закондың башҡа статьяларын да яҡшылап уҡып сығыу кәрәк: власть сығанағы - халыҡ. Рустар граждандлыҡ позицияһында торорға һәм властан Рәсәйҙә ул нисек илтеп көслө һәм сәскә атыусы ил итәсәге хаҡында һорарға тейеш. Милләтенә ҡарамайынса бөтә рәсәйлеләр был илдең граждандары, Рәсәй граждандары булыуы менән ғорурланырлыҡ булһын.

**Шулай итеп, "АиФ"тың ошо сығыштар аҫтындағы аңлатмаһында "Үҫеш хәрәкәте" етәксеһе Юрий Крупновтың ошондай фекерҙәре бар:** "90-сы йылдарҙа башланған инерциялы курсты туктатыу яҡлы көстәр бөгөн илде тарҡатыуға алып барған милли кәрттәр менән дөрөҫ итеп уйнай алыр ине. Бының өсөн милләтселәрҙе сәхнәгә сығарасаҡтар, шул этник бәрелештәргә килтереп еткерәсәктәр һәм "рус фашизмы" менән көрәш флагы аҫтында шөрөптәрҙе ныҡлап борасаҡтар". Бөгөн, бәлки, тап ошо күренеш көсәтәләр Рәсәйҙә? Нисек кенә булмаһын, быйылғы йыл Башҡортостанда  Милләтара татыулыҡты нығытыу йылы тип нарыҡланды. Республиканы ойоштороған һәм уға исем биргән башҡорт халҡы һәм республикала йәшәгән башҡа милләт вәкилдәре, һәр ваҡыттағыса, башҡаларға нисек дуҫ һәм татыу йәшәп була икәнен үҙ өлгөһөндә күрһәтергә, раҫларға тейеш. Иншалла, шулай булһын!

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔"Роспотребнадзор"ҙың БР буйынса идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, Өфөлә ОРВИ һәм грипп менән ауырыусылар һаны  һуңғы аҙнала унан алдағыһына ҡарағанда 21,8 процентҡа кәмегән, мәктәп уҡыусылары араһында 49, 5 процентҡа кәмегән. Баш ҡалала ошо отчет осоронда барлыһы 14,8 мең кеше ауырыған, уларҙың 6к8 осрағына грипп диагнозы ҡуйылған.

✔Мартта РФ Эске эштәр министрлығының граждандарға яңы һатып алынған автомобилдәрен теркәүҙе ябайлаштырыусы бойороҡ донъя күрәсәк. Был норматив акт РЭПтарҙағы ҙур сираттарҙы кәметергә ярҙам итәсәк. Уның буйынса, беренсенән, автоинспекторҙар двигатель номерын тикшермәйәсәк, икенсенән, автомобиль хужаһы машинаһын номеры менән бергә һата аласаҡ.

✔Былтыр Башҡортостан Республикаһы граждандары 115 мең сит ил паспорты алған. Паспортты биш йылға ла, ун йылға ла алырға була. Эшлекле кешеләрҙең күбеһе ун йылға бирелә торған биометрик сит ил паспортын һайлай. Бындай паспорт теләһә ниндәй дәүләттең паспорт-виза хеҙмәтендә ҙур ышаныс менән файҙалана. Рәсәй Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығында әйтеүҙәренсә, хәҙер сит ил паспортына ғаризаны электрон рәүештә (www.gosuslugi.ru.) интернет селтәре аша ла биреп була.

✔Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ҡарамағындағы "Хәләл" стандарты комитеты республикалағы һәм Белгород, Һамар, Свердловск, Силәбе өлкәләрендәге 35 предприятиеға хәләл ризыҡтар етештереүгә сертификат бирҙе. Был комитет 2009 йылда ойошторолғайны. Бына әле БР Диниә назаратының рәсми баҫма органы - "Хәләл" гәзите донъя күрә башланы. Уның беренсе һаны 11 февралдә сыҡты. Баҫма хәләл продукция ассортиментынан тыш, мосолман донъяһындағы ваҡиғалар, Ислам календаре даталары менән таныштырасаҡ, диндарҙар менән әңгәмәләр баҫтырасаҡ. 10 мең тираж менән сыҡҡан гәзитте БР Диниә Назаратында, "Ихлас" һәм "Хәмзә" мәсеттәрендә, Үҙәк һәм Колхоз баҙарҙарындағы "Хәләл" магазиндарында табырға була.

✔Республика балалар клиник дауаханаһы врач-неонатологы Фәйрүзә Латипова "Йылдың балалар врачы" Бөтә Рәсәй конкурсында "Педиатр-белгес" номинацияһында еңеп сыҡҡан.

✓ *Мин үҙем шәхсән туған башҡорт телемдән, туған мәҙәниәтемдән, китаптарҙан, театрҙарҙан, йырҙарҙан башҡа йәшәй алмайым. Был миңә кеше булараҡ кәрәк. Минең кеүек башҡорттар ике миллион самаһы.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЭШ УРЫНДАРЫ АРТАСАҠ

**БР Хөкүмәтенең сираттағы ултырышында "Көньяҡ Урал районадрының 2011- 2015 йылдарҙа иҡтисади үҫешенең урта сроклы комплекслы программаһы тураһында"ғы проектының тиҙҙән тормошҡа ашырыла башлаясағы белдерелде.**

Был пилот проект Сибай ҡалаһы, Әбйәлил, Баймаҡ, Ейәнсура, Йылайыр, Учалы һәм Хәйбулла районадрында йәшәгән халыҡтың тормош кимәлен күтәреү, төбәк иҡтисадында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ структуралары һанын арттырыу, ҡаҙылма байлыҡ сығарыу, ауыл хужалығы һәм ағас эшкәртеү производстволарын диверсификациялау, экологик проблемаларҙы хәл итеү, яңы предприятиелар асыу, әлегәсә үҫешмәгән тармаҡтар үҫешен әүҙемләштереү кеүек йүнәлештәрҙе төп урынға ҡуя. Мәҫәлән, "Сибай элеваторы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте базаһында иген агрохолдингы булдырыу ҡаралған. Предприятиеның әлеге ҡеүәтенә өҫтәп, яңы төр продукция етештереү, һуңыраҡ һөт һәм ит ризыҡтары етештереү, ҡошолоҡ тармағын үҫтереү, дәғүәселеккә һәләтле продукция етештереүҙе яйлау һәм шулай уҡ сауҙа брендын эшләү планлаштырыла. Шулай уҡ үҙ эсендә алты модулде туплаған агросәнәғәт кластеры ойоштороласаҡ. Йылҡысылыҡты, ҡортсолоҡто, тоҡомсолоҡто, балыҡсылыҡты, фермерлыҡты, һөт етештереүҙе һ.б. үҫтереү ҙә күҙ уңында тотола. Программаны тормошҡа ашырыу барышында 200-ҙән ашыу сара үтәлергә, 5400 яңы эш урыны булдырылырға, уртаса айлыҡ эш хаҡы күләме ике тапҡырға артырға тейеш, тип күҙаллана.

## ЯҢЫ ВӘКӘЛӘТ

**Яңы йылдан БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығына яңы вәкәләт бирелгән. Береһе - дәүләт хеҙмәткәрҙәренә пенсия түләү булһа, икенсеһе ветерандарҙы һәм инвалидтарҙы техник реабилитация средстволары, протез-ортопедия ҡорамалдары, шифахана-курорт дауаланыуы, дауаланыу урынына барыу һәм ҡайтыу менән тәьмин итеү.**

Ошо маҡсаттан яңы ойошма барлыҡҡа килгән. Ул баш ҡаланың Зорге урамында 15/1 адресы буйынса урынлашҡан "Граждандарҙы реабилитация средстволары һәм шифахана-курорт путевкалары менән тәьмин итеүсе республика үҙәге". Мохтаждар ғаризаны йәшәгән урыны буйынса бирә ала. Бер үк справка артынан тегендә-бында йөрөмәһендәр өсөн хәҙер берҙәм регистр булдырыласаҡ. Ә инде ветерандар һәм инвалидтар дауаланыу өсөн, мәҫәлән, памперс алырға, үҙ аҡсаһын тотона икән, уларҙың чектары буйынса аҡсаны кире ҡайтарып алырға мөмкин.

**"Башинформ".**

*АҘНА ВАҠИҒАЛАРЫ*

# УЛТЫРЫШ ҮТТЕ, ҺОРАУҘАР ҠАЛДЫ

**11 февралдә баш ҡалала Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев рәйеслегендә РФ Дәүләт Советы Президиумының йәмғиәтебеҙҙә милләт-ара татыулыҡты нығытыу темаһына, ошо мәсьәләне хәл итеү буйынса сараларға арналған ултырышы үтте. Унда РФ Дәүләт Советы Президиумы ағзалары - Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, Саха (Яҡут) Республикаһы Президенты Егор Борисов, Ярославль өлкәһе губернаторы Сергей Вахруков, Коми Республикаһы башлығы Вячеслав Гайзер, Ростов өлкәһе хакимиәте башлығы Василий Голубев, Ямал-Ненец Автономиялы Округы губернаторы Дмитрий Кобылкин, Дағстан Республикаһы Президенты Магомедсәлим Магомедов, Иркутск өлкәһе губернаторы Дмитрий Мезенцев, башҡа төбәктәр башлыҡтары, федераль министрҙар, РФ Йәмәғәт палатаһы ағзалары һәм башҡалар ҡатнашты.**

Һис һүҙһеҙ, ошондай сетерекле мәсьәләнең тәүге тапҡыр ошондай юғары кимәлдә тикшерелеүе үтә әһәмиәтле һәм был сараның тарихта ҡаласағы бәхәсһеҙ. Һөйләшеүҙәрҙең һөҙөмтәһе нисек булыр, ниндәй документтар, закондар ҡабул ителер, ниндәй дәүләт структуралары барлыҡҡа килер - быныһы әлегә билдәһеҙ. Яҡшы эштәргә өмөт итәйек.

Бындай сараларҙағы сығыштарҙа кемдеңдер ниндәйҙер фекере барыбер хәтерҙә оҙаҡҡа һеңеп ҡала. Был юлы, әлбиттә, Рәсәй Президентының сығышы "рәсәй милләте" булдырырға саҡырыуы менән хәтерҙә ҡаласаҡ.

- Бындай милләт Рәсәйҙә йәшәүсе барлыҡ халыҡтарҙың да милли үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыуҙы күҙ уңында тоторға тейеш, - тине ул. - Шул ваҡытта ғына беҙ көслө буласаҡбыҙ. Ҡасандыр бындай милләтте булдырып ҡараныҡ, тип әйтеүселәр ҙә табылыр. Эйе, тәүге тапҡыр уны аҙағынаса еткереп булманы, уға илдең тарҡалыуы ҡамасауланы. Ләкин башҡа илдәр бындай бурысты атҡарҙы бит, беҙ ҙә йырып сығырға тейешбеҙ.

Берҙәм милләт булдырырға тырышыуҙың ниндәй эҙемтәләргә килтерәсәге тураһында фекер алышыуҙар алда күп буласаҡ әле. Уны беҙ үттек бит инде. Башҡорт, татар милләтле, әммә урыҫ телле бер нисә быуындың үҫеп сығыуы шул берҙәм совет кешеһен формалаштырыу сәйәсәте һөҙөмтәһе икәне барыһына ла мәғлүм. Ул ғәмәлде тағы ла ҡабатларға теләрме икән халыҡтар?

Һәм тағы. РФ Мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко үҙенең сығышында төбәк компоненты дәреслектәренең федераль исемлеккә тап килмәүен билдәләп үтте. Раҫланмаған дәреслектәр буйынса уҡытыу ил төбәктәрендә йәшәүсе милләттәрҙең үҙ-ара аңлашылмаусанлығына килтереүе мөмкин, тине ул. Бында ла бәхәсләшергә урын бар. Федераль кимәлдә раҫланған дәреслектәрҙә Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә йәшәгән, илдең үҫешенә ҙур өлөш индергән милләттәр тураһында мәғлүмәттең бик наҡыҫ булыуын беләбеҙ. Милли компонент бит ошо бушлыҡты тултырыу зарурлығынан килеп сыҡҡайны.

Андрей Фурсенко мәктәптәрҙә милли телдәрҙе уҡытыу проблемаһына ла туҡталып үтте. Милли телдәрҙе ата-әсәләрҙең һәм балаларҙың теләгенән сығып өйрәтергә кәрәк, тине ул. Быныһын да беҙ үттек инде. Ата-әсәләр теләге менән балаларҙы спортҡа ылыҡтырырға, сит ил телдәрен өйрәтергә, төрлө түңәрәктәргә йөрөтөргә була. Ә республикаларҙың үҙендә Конституция һәм закон тарафынан дәүләт теле тип иғлан ителгән милли телдәрҙе нисек уҡытыу мәсьәләһен, әлбиттә, дәүләт үҙе көйләргә тейеш. Мәсьәлә шулай уҡ сетерекле һәм бында һүҙ юҡта һүҙ булһын тип кенә әйтелгән белдереүҙәр урынһыҙ.

Дөрөҫ әйтте Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов: "Телдәрҙе үҫтереүгә мәҙәниәттең мөһим элементына, илдең рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә ҡараған кеүек ҡарап, ярҙам итергә кәрәк. Мин үҙем шәхсән туған башҡорт телемдән, туған мәҙәниәтемдән, китаптарҙан, театрҙарҙан, йырҙарҙан башҡа йәшәй алмайым. Был миңә кеше булараҡ кәрәк. Минең кеүек башҡорттар ике миллион самаһы. Был барлыҡ татарҙарға, сыуаштарға, Рәсәйҙең башҡа халыҡтарына ла ҡағыла. Беҙгә үҙебеҙҙең телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ кәрәк. Шул уҡ ваҡытта телдәрҙе көсләп өйрәтергә ярамағанлығын да аңлайбыҙ. Көсләп асҡан күҙҙең нуры булмай. Әммә Рәсәйҙә күп теллелек тенденцияһы булырға тейеш. Беҙ бер түгел, ике, хатта өс тел белергә тейешбеҙ. Башҡортостанда беҙ шундай сәйәсәт үткәрәбеҙ һәм үткәрәсәкбеҙ".

**Шулай итеп, ултырышты йомғаҡлап, Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев айырым бурыстар йөкмәтәсәк. Уның фекеренсә, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү буйынса махсус структура ойоштороу маҡсатҡа ярашлы буласаҡ. Әле милли сәйәсәт Төбәктәрҙе үҫтереү министрлығы ҡарамағында булһа, хәҙер Координация советы йәки махсус комиссия төҙөләсәк һәм уға РФ Хөкүмәте рәйесенең урынбаҫары етәкселек итәсәк.**

# ИСЕМЕ ҠИТҒАЛАРҘЫ БӘЙЛӘЙ



**Төрки халыҡтары мәҙәниәтенең "ТӨРКСОЙ" халыҡ-ара ойошмаһы 2010 йылды тыуыуына 120 йыл тулыуға арнап Әхмәтзәки Вәлиди Туған йылы тип иғлан иткәйне. 14-16 февралдә республикабыҙҙа "ТӨРКСОЙ"ҙың йылды йомғаҡлау саралары үтте.**

Былтыр ТӨРКСОЙ илдәрендә ошо тематик йылға бағышланған бик күп саралар ойошторолдо. Истамбул университетында мемориаль таҡтаташ, Анкара ҡалаһының Кечиорен районында Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге парк, Тарсус ҡалаһында бөйөк ғалим исемендәге урам асылды, Ялов ҡалаһында, шулай уҡ Ҡаҙағстанда, Әзербайжанда, Ҡырым (Украина) Автономиялы Республикаһында бөтөн донъя ғалимдары ҡатнашлығында ғилми-ғәмәли конференциялар үткәрелде.

Әхмәтзәки Вәлиди йылын йомғаҡлау сараларында ҡатнашыу өсөн Төркиәнән "ТӨРКСОЙ"ҙың генераль секретары Дюсен Касеинов етәкселегендә рәсми делегация килде. Уның составында Төркиә Республикаһының мәҙәниәт һәм туризм министры урынбаҫары Кемаль Фахир Генч, Ә.-З. Вәлиди йылы сиктәрендә әүҙем ҡатнашҡан ҡала хакимиәттәре башлыҡтары, эшҡыуарҙар бар ине.

Рәсми делегация Өфөлә Әхмәтзәки Вәлиди исемен йөрөткән Милли китапханаға ғалимдың таҡтаташын асыуҙа ҡатнашты. Тантанала Дюсен Касеинов: "Халыҡтың үҙен күтәргән кешеләрен онотмауы ҡыуаныслы, - тине. - Әле беҙ Вәлидиҙең бәләкәй тыуған иленән - Ишембай районынан килдек. Ул Өфөнән алыҫта ятһа ла, кешеләр яҡташтарын онотмаған. Тап йылды уға бағышлау һөҙөмтәһендә Вәлиди тураһында бөтөн донъяға белдереүебеҙгә шатмын".

Сәфәр сиктәрендә ҡунаҡтар Өфөлә Башҡорт дәүләт аграр университеты, 84-се балалар баҡсаһы менән танышты. Иң төп сара булып баш ҡаланың Совет районы менән Анкараның Кечиорен районадры хакимиәттәре араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү Протоколына ҡул ҡуйыу торҙо. Был документ төрлө саралар уҙғарыуҙы, иҡтисад, ауыл хужалығы, мәғариф, туризм, фән һәм техника, социаль мәсьәләләр өлкәһендә файҙалы хеҙмәттәшлеккә йүнәлтелгән проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙы күҙаллай.

Конгресс-холда ойошторолған байрам тантанаһында "ТӨРКСОЙ" вәкилдәренә, Башҡортостан тарихсыларына һәм яҙыусыларына, йәмғеһе 12 кешегә БР Фәндәр академияһы булдырған ведомство наградаһы - "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" миҙалы тапшырылды.

Бөгөн Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың исеме ТӨРКСОЙ илдәрендә бөйөк ғалимдың ғилми мираҫын ғына түгел, дөйөм башҡорт мәҙәниәтен популярлаштырырға ярҙам итә, күп милләтле Рәсәй мәҙәниәте менән төрки донъяһын бәйләп тора.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы ултырышта баш ҡаланың муниципаль милкен хосусилаштырыуҙың прогноз планын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләре тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Былтыр, мәҫәлән, 339 объект хосусилаштырыуҙың прогноз планына индерелгән булған. Шуларҙың 171-е буйынса һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөлгән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең бәлиғ булмаған балалар менән эшләү һәм уларҙың хоҡуғын яҡлау буйынса комиссияһында 2 мең ауыр үҫмер иҫәптә тора. Былтыр баш ҡалала бәлиғ булмағандар тарафынан 330 енәйәт ҡылынған. Был, әлбиттә, 2009 йылғы менән сағыштырғанда аҙыраҡ, ә шулай ҙа балаһына йүнле тәрбиә бирә алмаған, үҙҙәре эскелек һәм наркоманлыҡ менән шөғөлләнгән ата-әсәләр иҫәбе арта бара. Комиссия былтыр ауыр үҫмерҙәр һәм уларҙың ата-әсәләре буйынса 4 мең эш тикшергән.

✓Былтыр Өфөлә 654428 кв. метр торлаҡ төҙөлдө һәм файҙаланыуға тапшырылды. Уларҙың 295904 кв. метры - күп ҡатлы, 358524 кв. метры шәхси йорттарҙы тәшкил итә.

✓Өфөләге "Биктырыш" балалар техник ижад үҙәге тураһындағы белешмә "Һәләтле балалар - Рәсәйҙең киләсәге" тигән энциклопедияға индереләсәк. Был үҙәк Өфөлә 1968 йылда асылған. Ул бөгөн Башҡортостанда техник йүнәлештәге өҫтәмә белем биреүсе алдынғы учреждениеларҙың береһе.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы балалар музыка мәктәптәре һәм сәнғәт мәктәптәре уҡыусыларының ҡала конкурстарын булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Конкурстар 16 февралдән башланып, 20 февралдә Өфө балалар сәнғәте мәктәбендә йәш пианистар конкурсы менән тамамлана.

✓Был аҙнала 24 февралгә тиклем республикала ҡаты һыуыҡтар көтөлә. Шул сәбәпле 19-20 февралдә баш ҡалала буласаҡ ауыл хужалығы йәрминкәләре кисектерелә һәм 26-27 февралгә күсерелә.

✓19-20 февралдә "Строитель" стадионында мотоцикл менән боҙҙа уҙыш буйынса Рәсәй команда чемпионатының 3-4-се этабы үткәреләсәк. Унда Рәсәйҙең көслө моточемпиондары, донъя һәм Европа чемпиондары ҡатнашыуы көтөлә.

АФАРИН!

# ТУЛЫ ҠАНЛЫ ЙӘШӘҮ...

## спорт менән дуҫ булыу ул

Башы 1-се биттә.

**➔ Оҙайлы ваҡыт көсөргәнешле күнекмәләр менән шөғөлләнеләр өсөн матди шарттар булыуы ғына аҙ - ныҡышмалылыҡ та талап ителә. Тәү ҡарашҡа ымһындырғыс, ҡыҙыҡлы булып күренгән каратэ сәнғәтенә ысын мәғәнәһендә төшөнөү өсөн ниндәйҙер кәртәләрҙе лә үтергә кәрәк булғандыр...**

- Спортҡа тәү башлап аяҡ баҫҡанда ҡыйынлыҡтар булды, әлбиттә. Бәләкәй сағымда, башҡа тиҫтерҙәрем һымаҡ, тышта уйнағым килә торғайны. Әлләй күнекмәләргә йөрөмәҫкә лә ҡуйырғамы икән, тигән икеле уйҙар ҙа булманы түгел. Шөғөлләнә торғас, спортты яйлап оҡшата башланым. Республика ярышында ҡатнашып, тәүге еңеү кинәнесен дә татыным. Спортта алға барырға теләйһең икән, иң тәүге осорҙа осраған ҡаршылыҡтарҙы түҙемле генә үткәреп ебәрә белергә тейешһең, тигән фекерҙәмен. Сөнки минең Рәсәй кимәлендәге тәүге чемпионатым әллә ни уңышлы булманы. Еңелеүҙе ауыр кисерһәм дә, еңеүҙәр килеренә ихлас ышандым.

**➔ Әйткәндәй, 11 йәшлек ҡустың Сыңғыҙ ҙа ноябрь айында Тольятти ҡалаһында уҙғарылған ярышта ҡатнашып, косики-каратэ буйынса Рәсәй чемпионы исемен яулап ҡайтҡан. Ике балалы Ильясовтар ғаиләһендә ике чемпион тәрбиәләнеүе ябай тап килеү түгелдер бит? Ҡустыңдың уңыштарында ниндәйҙер кимәлдә, ағай булараҡ, һинең дә өлөшөң барҙыр...**

- Икебеҙ ҙә косики-каратэ менән шөғөлләнәбеҙ. Сыңғыҙ ҡустымдың еңеүе барыбыҙ өсөн дә ҙур шатлыҡ булды. Ул ҙә ауырлыҡ категорияһындағы 35-40 кеше араһында беренсе урынға сыҡты. Был ярышта үҙем дә чемпион булдым, әлбиттә. Тик был күренеш гәҙәтигә әйләнгәнгә күрәлер, үҙемдең еңеүгә артыҡ ҙур әһәмиәт бирмәнем. Ҡустым өсөн ныҡыраҡ борсолдом. Уға төрлө кәңәштәр бирҙем, рухын күтәрергә ярҙам иттем. Беренсе тренерымын, тип әйтһәм дә, хата булмаҫтыр, моғайын.

**➔ Ғәҙәттә, көнсығыш һуғыш төрҙәре менән шөғөлләнгән кешеләргә азиаттарҙың сыҙамлылығы хас. Бында, бәлки, ниндәйҙер законлылыҡ та барҙыр. Мәҫәлән, әле һин "лотос" һынында бик еңел генә ултыраһың. Минә, аяҡты бөгөп ултырыуға ҡарағанда, ултырғысҡа ултырыу күпкә еңелерәк...**

- Көн һайын, күнекмәләрҙе башлар алдынан, ритуаль өлөш буларах, ошо "лотос" һынында тын ғына 5 минут самаһы ултырып, алдағы "алышҡа" көйләнәбеҙ. Кешеләр күнекмәләргә төрлө кәйефтә килә. Кемдеңдер күнелен ниҙер борсоп, йөрәген ниҙер өйкәп тороуы мөмкин. "Лотос" һынында ултырыу тынысланырға ярҙам итә. Үҙең менән алып килгән бар уйҙарыңды ситкә ҡуйғандан һуң ғына эшкә тотонаһың. Шулай уҡ күнекмәләр тамамланғандан һуң да бар уй-кисерештәреңде залда ҡалдыраһың һәм артабан йәшәүеңде дауам итәһең. Минең өсөн күнекмәләр залы - үҙенсәлекле бер ял итеү урыны ла. Уны икенсе өйөм, тип тә әйтә алам...

**➔ Спорт менән шөғөлләнеү һинә урамда ғына түгел, ә тормошта ла ярҙам итеүенә шик юҡ...**

- Эйе, каратэ минең өсөн яратҡан шөғөл генә түгел, ә йәшәү рәүеше лә. Каратэ сәнғәтендә ырыу аҡһаҡалдарына, өлкәндәргә ихтирам бар. Япон һәм башҡорт халҡының оҡшаш һыҙаты был. Беҙгә, башҡорттарға, япон мәҙәниәтен өйрәнеүе шуныһы менән еңел.

Был спорт тағы шуныһы менән етди: ни өсөн мин теге йәки был эш менән шөғөлләнәм икән, тигән һорауға аныҡ яуап бирә белергә өйрәтә.

Мин футбол менән дә мауығам. Был ике спорт төрөн берләштереп, шуны әйтергә кәрәк: футболда хистәрҙе тыймайҙар - унда шар-шор көләргә, ҡысҡырып һөйләшергә, өлкәндәр менән типә-тиң аралашырға була. Ә каратэ хистәрҙе ауыҙлыҡлай. Тағы ла: алышҡан саҡта, беренсенән, юғары техникаға эйә булыу, икенсенән, ситуацияны контролдә тотор өсөн һалҡын ҡанлылыҡ һәм интуитив һиҙгерлек талап ителә. Был һыҙаттар тормошта ла ярҙам итә.

**➔ Европа чемпионатынан алып ҡайтҡан миҙалдарҙа аңлайышһыҙ ике һүҙ - "ката" һәм "кумитэ" тип яҙылған. Улар нимәне аңлата?**

- Ката һәм кумитэ - косики-каратэның ике дисциплинаһы. Тәүгеһе техника оҫталығын күрһәтеүҙе, икенсеһе һуғышыуҙы аңлата. Техник оҫталыкты күрһәткән катала тотамиҙа спортсы яңғыҙы сығыш яһай. Һуғышыуҙы күҙ уңында тотҡан кумитэла - бер тигеҙ ауырлыҡтағы дәғүәселәр көс һынаша. Кумитэла мәрәйҙәр буйынса ла, бокстағы һымаҡ нокаут ярҙамында ла еңергә була. Әйткәндәй, 2006 йылда Грецияның Афины ҡалаһында үткәрелгән косики-каратэ буйынса Бөтә донъя чемпионатында ҡатнашып, тап ошо кумитэ буйынса чемпион булдым.

**➔ Бөтә донъя чемпионатында ҡатнашыу өсөн Рәсәй спортсыларына дәүләт тарафынан финанс ярҙам етерлек күләмдә күрһәтеләме?**

- Олимпия уйыны исемлегенә ингән ярыштарға финанслау ҡарала, был исемлеккә инмәгән башҡа күп кенә спорт төрҙәренә, шул иҫәптән каратэға ла финанслау ҡаралмаған. Тренерҙарыбыҙ БР Спорт һәм туризм министрлығына күп тапҡырҙар мөрәжәғәт итеүгә ҡарамаҫтан, финанс ярҙам күрһәтелгәне юҡ әлегә. Донъя кимәлендәге ярышҡа барып ҡайтыу өсөн 100-150 мең самаһы аҡса талап ителә. Иң ҙур проблема шул. Был йәһәттән бар ауырлыҡ әсәй елкәһенә төшә. Әлегә - ул беҙҙең бағыусы.

**➔ Рәсәйҙә спортты үҫтереү потенциалы тураһында ни әйтерһең?**

- Рәсәйҙә көслө спортсылар бик күп. Йәнең теләгән өлкәне үҫтерергә була. Мәҫәлән, беҙҙә тау саңғыһы өсөн - ҡыш, велоспорт өсөн - йәй, шулай уҡ тауҙар, урмандар, күлдәр, икһеҙ-сикһеҙ тигеҙлектәр бар. Әммә был ерлекте ҡәнәғәтләнерлек итеп файҙаланып булмай. Ерлеге сикле булып та, дәүләт иғтибары



арҡаһында спорттың ниндәйҙер төрөн үҫтерә алған ҡайһы бер илдәргә ҡарап һоҡланам. Мәҫәлән, ҡар күрмәгән көньяҡта хоккей өсөн боҙ һарайҙар төҙәйҙәр икән, был яҡшы күренеш.

**➔ Каратэны күптәр аяуһыҙ спорт төрө, тип уйлап, балаларын йөрөтөүҙән ҡурҡа...**

- Косики-каратэ башҡа каратэларҙан шуныһы менән айырыла: был төрҙә баш, бит тирәһе шлем, ә тәндә махсус ҡаты кейем ҡаплап тора. Шуға күрә атаәсәләр өсөн ҡурҡырлыҡ бер ни юҡ. Баланы үҫтерергә кәрәк. Ул ғүмер буйы әсәһе итәгенә йәбешеп йөрөй алмаясаҡ.

**➔ Бөгөн күп йәштәр һыра эсеү, тәмәке тартыу һымаҡ алама ғәҙәттәр менән мауыға...**

- Эйе, ҡайһы берәүҙәр үҙ йәшлеген ҡолас ташлап йөрөп үткәрергә иҫәп тота. Тик күптәр тулы ҡанлы йәшәүҙе тулы бокалдарҙан шарап эсеү менән бутап, янылыша. Бар ялтыраған нәмә алтын булмай. Бар маҡсаттарҙы ла башҡалар ҡабул иткән еңел юл менән генә тормошҡа ашырып булмай. Мин аныҡ маҡсаттар менән йәшәйем. Уларға өлгәшеү нигеҙе - һаулығым, тип һанайым. Сәләмәтлек иң беренсе урында булғанда ғына йәнең теләгән маҡсатҡа өлгәшеп була. Шуға күрә, һаулыктың ҡәҙере башҡа ҡиммәттәр араһында бугалып ҡалырға тейеш түгел. Ул - һәр саҡ беренсел ҡиммәт.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Салауат менән Сыңғыҙ - республикала билдәле шәхес, гәзитебеҙҙең дуҫы һәм авторы Спартак ағай Ильясовтың ейәндәре. Ул ейәндәре тураһында бына нимә ти: "Улар тегеләй һуғылып, бында барып төртөлөп йөрөмәй. Салауат үҙе тыныс ҡына холоҡло. Йәй булһа, улар ауылға ҡайтырға атлығып тора. Ауыл малайҙары, Салауат килһә, янына өйөрөлөшөп килеп тә етә. Уны лидер күрәләр. Уҡыуҙа икеһе лә ал бирмәй: Салауат 4 һәм 5 билдәләренә өлгәшһә, Сыңғыҙ тик 5-легә генә уҡый. Мин үҙем уларҙы штанга, гер күтәреү менән ҡыҙыҡтыра инем. Балыҡҡа алып йөрөйөм, урманда мылтыктан аттырам. Егет кешегә былар ҡыҙыҡ бит".**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
әңгәмә ҡорҙо.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Ашҡаҙан аҫты биҙе насарайһа...

Был дауа үт ҡыуығы һәм ашҡаҙан аҫты биҙенең ялҡынһыныуы йәки некроз булыуы арҡаһында шәкәр диабеты башланғанда яҡшы файҙа бирә.

Бының өсөн һары мәтрүшкә, цикорий, меңъяпраҡ, бөпкә үләне (спорыш), әрем, бөтнөк, алтынбаш (золотарника трава), һоло, етен орлоғо, ҡайын япрағы, сәтләүек ҡыуағы (лещина) һәм ерек япраҡтары, фасоль ҡуҙағы, ҡара көртмәлә үренделәре, ерек ҡайыры, шыршы ылыҫын бергә болғатҡас, 1 ҡалаҡ ҡатышманы 300 грамм һыуға һалып, 5-7 минут талғын ғына ҡайнатырға. Ҡайнатманы төнгөләккә тәнәтергә ҡуйырға. Ашар алдынан 10-15 минут алда көнөнә өс тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. Дауаны ауырыуҙың хәленә ҡарап 10 көндән 2-3 айға тиклем ҡулланырға була. Тик бер ай дауаланғандан һуң 10-ар көн ял эшләп алырға кәрәк.

Был дауаны ҡулланғанда тәмәке тартһан йәки араҡы эсһәң, файҙаһы юҡҡа сыға.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

### Ирендәр ярылғанда...

❖ Ирендәргә бал һөртөргә һәм 15-20 минуттан һуң йыуып, крем һыларға; ❖ ҡыяр һыуы менән йомшартырға ла була. Көнөнә бер-нисә мәртәбә эшләргә кәрәк; ❖ һалҡын, елле көндәрҙә урамға сығыр алдынан ирендәргә майлы крем һөртөргә лә өҫтөнән пудра яғырға, һуңынан ғына помада ҡулланырға; ❖ 1 балғалаҡ эремсеккә 1 балғалаҡ кишер һуты ҡушып яһалған ҡатнашманы һөртөргә; ❖ 1 балғалаҡ вазелинға балғалаҡтың 4/3 өлөшө күләмендә касторка майы ҡушып та һөртергә була; ❖ 6-7 грамм какао, 2-3 грамм балауыҙ һәм 10 грамм үҫемлек майынан яһалған майҙы һөртөргә була.

### Биткә һыҡылар сыҡһа...

Ул йышыраҡ үҫмерҙәрҙә күҙәтелә. 1 банкаға 100 грамм спирт һәм бер лимондың һутын һығып болғатырға. Икенсе банкаға 100 грамм ҡаймаҡ (ауылдыҡы шәп була), бер йомортҡаның һарыһын һалып болғатырға. Ике тәнәтмәне бергә ҡушырға һәм бер аҙна һыуыҡтыса тоторға. Ошо дауаны биткә көнөнә ике тапҡыр - иртәнсәк һәм кис һөртөргә кәрәк. Ә тәнәтмә һыуыҡтыса ултырһын.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*



Рәфис БАТЫРҠАЙ һүрәте.

# ИСМӘҒИЛ ТАСИМОВ

## (XVIII быуат)

**Башҡорттар Уралдың минераль-сеймал байлыҡтарын үҙләштереүҙә ғәйәт ҙур һәм мөһим роль уйнай. XVIII быуатта башҡорттар араһынан ҙур бер төркөм мәғдәнселәр, мәғдәнсе йүнселдәр категорияһы, хатта мәғдәнселектең нәҫелдән-нәҫелгә күсеше үҫеп сыға.**

Уралда, айырыуса ул саҡтағы Пермь өйәҙендә, мәғдән сәнәғәтселәре XVIII быуаттың тәүге яртыһында формалаша, уларҙың эшмәкәрлеге, быуындан-быуынға тапшырылып, шул уҡ быуаттың аҙағына тиклем өҙөлкһеҙ дауам итә. Әгәр ҙә тәүге быуын мәғдәнселәр араһында башҡорт феодалы Тасим Майметов күренекле урында торһа, артабан был эште уның улы Исмәғил Тасимов дауам итә. Исмәғилдең улы Исхаҡ Исмәғилев (русса документтарҙа - Измайлов) атай-олатай һөнәренә тағы ла дан һәм шөһрәт өҫтәй. Пермь мәғдән сәнәғәтселәренең күпселеге нәҡ бына шул Ғәйнә башҡорттары була (улар менән бергә бер нисә рус мәғдәнсеһе эшләй). Уларҙың иҫәбе 360 кешегә етә. Күпселеге - Ҡуян ауылы йүнселдәре. Илленсе йылдарҙа Ҡуян ауылынан - Тасимовтар, Ҡолтайҙан - Ҡолтаевтар, Ҡаҙмаҡтынан Ишбулатовтар эре мәғдән сәнәғәтселәре булып таныла.

1757 һәм 1759 йылдарҙа Пермь мәғдәнселәренең эшмәкәрлегенә ғәйәт ҙур йоғонто яһарҙай ваҡиға булып үтә: башта Йыҡ заводтары, унан һуң Ягошиха заводы ҡаҙнанан шәхси милекселәр ҡулына күсә. Үргә һәм Түбәнге Йыҡ заводтарына граф И. Г. Чернышев хужа булып ала. Әммә, завод хужалары менән мәғдән сәнәғәтселәренең мөнәсәбәттәре, заводтарҙы мәғдән менән тәьмин итеү шарттары махсус килешеү менән нығытылған булыуға ҡарамаҫтан, граф Чернышев һәм уның баш приказчигы Ф. Санников, закон менән иҫәпләшмәйенсә, бер нисә йыл эсендә башҡорт мәғдәнселәренең Йыҡ заводтарын сеймал менән тәьмин итеүсе мәғдәнятҡылыҡтарын баҫып ала, өҫтәүенә ул ятҡылыҡтарҙағы 500 000 бот мәғдәнде лә үҙләштерә. Исмәғил Тасимовҡа, мәғдәнсе Ғәйнә башҡорттарының мәнфәғәттәрен яҡлап, көслө һәм тәкәббер батша вельможаһы, уның оятһыҙ, яуыз приказчигы менән ҡара-ҡаршы тороп ауыр көрәш башларға тура килә.Оҙаҡ йылдар буйы барған был көрәштә башҡорт мәғдәнселәре еңеп сыға һәм, ниһайәт, улар үҙҙәренең мәғдән ятҡылыҡтарын ҡайтарып алыуға, граф Чернышевтан күргән зыяндың бер өлөшөн түләтеүгә өлгәшәләр.

Исмәғил Тасимов һәм мәғдәнсе Ғәйнә, йәғни Пермь башҡорттары, фәҡәт ошо мәғдән сығарыу эшмәкәрлеге менән дә тарихта ғәйәт ҙур һәм маҡтаулы урын алырға хаҡлы. Әммә Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәре тотош Рәсәй империяһы алдында быуаттарҙан-быуаттарға ҡалырлыҡ тағы бер хеҙмәт күрһәтә, шуның менән Исмәғил Тасимовтың исеме Рәсәйҙә һәм, әлбиттә, Башҡортостанда тау эшенә нигеҙ һалыусы булараҡ ил һәм милләтебеҙ тарихында күркәм урын ала.

Ә эш шунан башлана. XVIII быуаттың 50-се йылдарында Рәсәйҙә тау эштәре өлкәһендә юғары белем биреүсе уҡыу йорто асыу, илдең үҙендә тау сәнәғәте өсөн белгестәр әҙерләү мәсьәләһе өлгөрөп етә. Әммә был мәсьәлә тиҙ генә хәл ителмәй. Тау заводтарында етештереүҙең төп вазифалары һаман да немец белгестәре ҡулында ҡала. Ошондай шарттарҙа 1766 йылда билдәле ғалим академик И. Г. Леман, Тау училищеһы ойоштороуҙың мөһимлеген раҫлап, шул уҡыу йортонда уҡытыу программаһын билдәләп, махсус яҙма төҙөй. Шул уҡ осорҙа инде замандаштарына киң билдәле башҡорт мәғдән сәнәғәтсеһе Исмәғил Тасимов һәм уның иптәштәре үҙ халҡы араһынан белгестәр әҙерләү маҡсатында үҙҙәре иҫәбенә Уралда, Йыҡ заводтары янында кадет корпустары тибында Тау училищеһы асыу идеяһы менән йәшәй башлайҙар. Теләк һәм ниәттәр, әлбиттә, бик ҙур була: беренсенән, башҡорт балаларына таусылыҡ өлкәһендә махсус әҙерлек алыу өсөн юл асылырға тейеш, икенсенән, башҡорттарҙың заводтарҙы мәғдән менән тәьмин итеү генә түгел, бәлки үҙҙәре лә завод хужалары булып китергә ҡулдарынан килмәҫлекме ни! Өсөнсөнән, ошо башланғыс уларға мәғдән етештереүҙе артабан да киңәйтергә, ҡаҙна ҡарамағындағы мәғдән ятҡылыҡтарын ҡулға төшөрөргә мөмкинлек бирергә тейеш.

Ошо уй-ниәттәр менән ҡанатланып, үҙенең улдары Исхаҡ һәм Мөхәммәтрәхим, компаньон туғантыумасаһы, ырыуҙаштары, электән бергә иңгә-иң терәп эшләп килгән бүтән мәғдәнселәр менән кәңәшләшеп килешкәндән һуң 1771 йылда Берг-коллегияға, Тау училищеһы асыу кәрәклеге һәм шул училище өсөн үҙҙәре сығарған мәғдәндең һәр бото иҫәбенән берәр полушка (тиндең дурттән бер өлөшө) аҡса бүлергә риза булыуҙары тураһында белдереп, ғариза (челобитный) яҙалар. (Һуңынан Тасимов һәм уның иптәштәре 1792 йылға тиклем йыл һайын Тау училищеһы файҙаһына аҡса күсертеп тора.) Берг-коллегияның президенты М. Ф. Соймонов башҡорт мәғдән сәнәғәтселәренең башлап ебәргән ынтылышын хуплап ҡаршы ала. Хат Сенатҡа барып етә. 1773 йылда, ниһайәт, Екатерина II Рәсәйҙә тау эштәре буйынса юғары уҡыу йорто - Тау училищеһы асыу тураһындағы указға ҡул ҡуя. Әммә ул, башҡорттар һорағанса, Йыҡ заводтары эргәһендә түгел, ә Санкт-Петербургта асыла. Уны башҡорт сәнәғәтселәре иҫәбенә тотоу ҙа хуп күрелә, әлбиттә, ләкин уларҙың балаларына был уҡыу йортона инеп уҡыу хыялы ғына оҙаҡ ваҡыттар тормошҡа ашмай. Тасимовтың үҙенең улдарының да Тау училищеһына кереп уҡыу теләге татлы бер хыял ғына булып ҡала. "Мәрхәмәтле" батша властары аңбеленгә һәм киң эшмәкәрлеккә ынтылған башҡорт уҙамандарын бына шулай төп башына ултырта.

1873 йылда, Петербург Тау училищеһының 100 йыллығын байрам иткән көндәрҙә, Исмәғил Тасимовтың исеме ҙур хөрмәт менән иҫкә алына. Әммә шуныһы ғәжәпкә ҡалдыра: үҙҙәрен белемле, мәғрифәтле тип иҫәпләгән рус белгестәре, башҡорт Тасимовтың тарихи эшмәкәрлеген юғары баһалаһалар ҙа, уның уҡымышлы оло фекер эйәһе булыуына һис кенә лә ышанырға теләмәйҙәр.

Совет осоронда "өлкән ағайыбыҙ", унан бигерәк "уртансыһы" ла башҡортто, уның телен, һәләтен кәмһетеү өсөн ниндәй генә юлдарға барманы. Оло аҡыл эйәһе Исмәғил Тасимовҡа булған был мөнәсәбәт - оло милләт вәкилемен тигән бәндәләрҙең бына шул тар ҡарашлығын, сикләнгәнлеген ап-асыҡ күрһәтеүсе бер тарихи казус. Казус, сөнки тарихи әһәмиәтле эштәр атҡарыусы, тиҫтәләрсә йылдар буйы сәнәғәтселек менән шөғөлләнеп, дан ҡаҙанған, тотош бер мәғдән белгестәре нәҫеленең оло мәртәбәһе булып танылған эшмәкәрҙе наҙан тип атау хаҡында бүтәнсә ни тип әйтәһең. Исмәғил Тасимов та, уның дәүерендәге башҡорт йәмғиәте лә, колонизаторҙар уйлағанса, һис тә тома наҙан булмаған, әлбиттә. Исмәғил Тасимов менән уның компаньондарының хаттары башҡорттоң уҡымышлылығын да, һәләт һәм талаптарын да асыҡ күрһәтеүсе бер дәлил. Ә ул дәүерҙә башҡорт ижтимағи фекеренең юғары кимәлдә тороуын билдәләүсе документтар бихисап.

Шулай итеп, Исмәғил Тасимов исемен хәҙер Г. В. Плеханов исемендәге Санкт-Петербург Тау институтына һәм, ғөмүмән, Рәсәйҙә тау эшенә нигеҙ һалыусы, XVIII быуат башҡорт мәғдән сәнәғәтселәренең атаҡлы бер вәкиле, арҙаҡлы тарихи шәхестәребеҙҙең береһе булараҡ ҡәҙерләп һәм ҙурлап иҫкә алабыҙ.

**Рәшит Шәкүр.**
**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

*АТАЙ ҺҮҘЕ*

# ҒӘҘЕЛ ИР ТӘРБИӘЛӘНЕҢ ИКӘН...

## бурысың үтәлгән булыр

**Һорау: "Һеҙ атайығыҙҙан ниндәй ир тәрбиәһе алдығыҙ? Улдарығыҙҙы ниндәй ир тәрбиәһе биреп тәрбиәләйһегеҙ?"**

Совет осорона тура килде минең бала саҡ. Атайыбыҙ Вәлиәхмәт оҙаҡ йылдар "Ирәндек" совхозында, аҙаҡ Сибай леспромхозында хисапсы булып эшләне. Беҙҙең менән иркенләп тәрбиә тураһында һөйләшеп ултырырға ваҡыты ла булмағандыр уның. Нотоҡ уҡыуын хәтерләмәйем. Шулай ҙа яйы сыҡҡан һайын "эштән бәреү ҙә үлмәгән", "таш менән атҡанға аш менән ат" кеүек мәҡәл-әйтемдәрҙе ҡабатлап, мейегә һеңдереп ҡуя ине. Беҙ, өс малай һәм бер ҡыҙ, өй һәм кәртә-ҡура эштәрен бергәләп башҡарабыҙ. Ҡайһы бер эштәрҙе үҙ аллы эшләргә өйрәнә инек. Мин баш бала булғас, кесе туғандарым кәнәште лә минән генә һорай ҙа ҡуя ине.

Тәртип мәсьәләһе беҙҙең ғаиләлә ҡабырғаһы менән тормаһа ла, эш боҙһаҡ, ишек башындағы сыбыҡ менән янау, хатта бер-икене эләктереп алыу ҙа булманы түгел, булды. Иң шаяны булғанға, "арт һабағы" минә йышыраҡ тәтене шикелле барыбер. Минеңсә, бала ярамаған эш ҡылһа, сыбыҡ күрһәтеп алыу кәрәк ул. Тик саманы ла оноторға ярамай. Һәр ваҡыт сыбыҡ йә ҡайыш тотоп йөрөү ир кешене биҙәмәй.

Үҙемдең өс улым бар. Өлкән улым Рәфил мәктәптән һуң БДУ-ның Сибай институтын тамамланы. Ватан алдындағы бурысын да намыҫ менән үтәне. Әлеге көндә Сибай ҡалаһында эшләй. Уртансы улымдың исеме Алмас. Әле Өфө ҡалаһында 9-сы синыфта уҡып йөрөй. Тағы ла 5 йәшлек Рәфис улыбыҙ бар. Кинйәбеҙ тиктормаҫ, уғата шаян булып үҫеп килә. Улдарыбыҙҙан ҡәнәғәтбеҙ.

Ир бала атаһы өйрәткән бар эште лә тиҙ өйрәнә. Минең улдарым да ни өйрәтһәң, шуны отоп алыусан. Өлкән улым бураһын да бурай, кирбесен дә һала. "Ир-егеткә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тигән мәҡәлде белмәй әйтмәгән шул боронғолар. Баланы эшлекле итеп тәрбиәләр өсөн үҙең тилбер бул икән. Ир кеше тәү сиратта ғаиләһен туйындырырға бурыслы. Бының өсөн тормош ҡуйған барлыҡ һынауҙарға алдан уҡ әҙер булыу талап ителә. Малайҙарҙың күп һөнәргә эйә булырға тырышыуы шуға ишара түгелме ни? Бәлки, уларҙың ҡанына һеңгәндер был?

Егет кеше ғилемле лә булырға тейеш. Мин үҙем дә бәләкәйҙән китап уҡырға яраттым. Бала сағымда берәй үтә мауыҡтырғыс әҫәргә юлыҡһам, төндәрен өлкәндәрҙән әрләнмәҫ өсөн юрған аҫтында кеҫә фонаре яҡтыһында уҡып ятыр булдым. Баймаҡта СПТУ-ла уҡыған саҡта китапханалағы барлыҡ ҡыҙыҡ китаптарҙы уҡып бөтөргәс, ҡала китапханаһына барып яҙылдым. Бер егеттән: "Өлфәт, һин китаптарҙы әллә ашайһың инде?" - тип шаяртыу ҡатыш һоҡланыуы әле лә иҫтә. Әрмелә лә китапхана бәләкәй тойолдо... Китап ене бер ҡағылһа, ғүмерлеккә икән был. Әле лә гәзит-журналдар алдырабыҙ, уларҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡуҙәтеп барабыҙ.

Атай кеше ғәҙел булырға тейеш. Бала күңеле ғәҙеллекте һиҙгер тойомлай. Атаһын ғәҙеллек өлгөһө һанаған егет һәр ваҡыт уға оҡшарға тырышасаҡ. Атай кеше ғәҙел ир тәрбиәләй ала икән, халҡы алдында иң оло бурысын үтәне тигән һүҙ.

**Өлфәт ҒӘЛИӘХМӘТОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Иҫке Сибай ауылы.**

*✓ Беҙгә кисекмәҫтән ситтә йөрөгән егеттәрҙе ҡайтарып, колхоздарҙы киренән аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Мин ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуҙың башҡа юлын күрмәйем. Һәр районда бынамын тигән фермерҙар бар.*



**Яҡын дуҫыбыҙ, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институтының төбәк иҡтисады бүлеге мөдире, академик, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Мазһар Насип улы Иҫәнбаевтың "Киске Өфө" гәзитендә яһаған сығыштары һәр саҡ киң йәмәғәтселек тарафынан яңы һүҙ итеп ҡабул ителә. Уның"Беҙ һауған һөттөң ҡаймағын башҡалар ашаған икән дә..." (2007 йыл, 13-сө һан), "Маҡсат ысулды аҡлай, йәғни Колхозды һаҡлау ерҙе, тимәк, милләтте һаҡлау ул..." (2008 йыл, 46-сы һан) кеүек сығыштарын республикабыҙҙа ауыл хужалығын үҫтереү, ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу буйынса программа документы булып ҡабул итерлек.**
**Ғәҙәттә, Мазһар Насип улы беҙҙең редакцияға саҡырыуыбыҙҙы көтмәйенсә, әйтергә теләгән фекерҙәре күңелендә ҡайнап, урғылып сыҡҡас килеп инә һәм трибуна һорай. Был юлы ғалимды редакциябыҙға тыуған еребеҙ хаҡында уғата борсолоуы алып килгән. Түбәндә уның менән әңгәмәне тәҡдим итәбеҙ. Һүҙебеҙҙе ғалимдың бығаса яһаған сығыштары юҫығында башланыҡ.**

# КОЛХОЗ ОЖМАХ

## тик ул саҡта



*Көньяҡ-көнсығыш төбәктә Учалы районынан башлап Ейәнсураға, Күгәрсенгә тиклем эре-эре совхоздар төҙөлдө һәм улар баяғы "заготовительдәр" өсөн план үтәү, сеймал оҙатыу конвейеры ролен үтәне. Был хәл махсус эшләнгәнме-юҡмы, стихиялы рәүештә барғанмы, һөҙөмтәһен бөгөн татыйбыҙ: төньяҡ-көнбайышта күп кенә колхоздар һаман да гөрләп эшләп ултыра, ә Урал аръяғы райондары халҡы эш эҙләп донъя ҡыҙыра. Беҙҙең тикшеренеүҙәр буйынса 70-90-сы йылдарҙа көньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнсығыш райондарынан 300 меңләп башҡорт кешеһе ҡырға китергә мәжбүр булған. Быға иң тәүге нәүбәттә колхоздарҙың совхоздарға әйләндерелеүе, бәләкәй ауылдарҙың юҡҡа сығыуы сәбәпсе булып тора. Түмән өлкәһендә йәшәүсе өс кешенең береһе башҡорт иҫәпләнә, бына бит ниндәй хәлгә барып еткәнбеҙ.*

**Ә. ҮТӘБАЙ: Совет осоронда күп һанлы егет-ҡыҙҙарыбыҙҙың Себергә йә башҡа төбәктәргә эш эҙләп сығып китеүен, милләтебеҙҙең күп һанлы техник интеллигенция вәкилдәренең ситтә "нығыныуын", балаларының һәм ейәндәренең үҙ телен, тарихын белмәй үҫеүен бик яҡшы беләбеҙ. Әле илебеҙҙә барған "бөйөк" үҙгәрештәргә ике тиҫтәнән ашыу ваҡыт үтте һәм беҙ һаман да шундай уҡ хәлдең шаһитыбыҙ, йәғни һаман да милләтебеҙҙең аҫыл ирегеттәре, ҡатын-ҡыҙҙары көнлөк хаҡына сит яҡтарҙа бил бөгә. Өфөлә, Магнитогорскиҙа, Мәскәүҙә, Питерҙа һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында ялланып төҙөлөштә эшләп йөрөүселәрҙең байтағы эш биреүселәрҙән алданып, аҡсаһыҙ, йәшәргә урынһыҙ, ҡайтыр өсөн юллыҡ аҡса таба алмай, ҡалаларҙың вокзалдары буйлап ҡыҙыра. Уларҙың ҡайһы берҙәре хатта беҙгә, "Киске Өфө" гәзите редакцияһына ла шылтырата. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, үҙ ғаиләләренән, ирҙәренән айырылып, Европа илдәрендә, башлыса, Италияла байҙарға бил бөгә. Әйткәндәй, сит яҡтарҙы башлыса ауылдарҙа йәшәүселәр эш эҙләп ҡыҙыра һәм былар барыһы ла элекке ауыл хужалығының - колхоз-совхоздар юҡҡа сыҡҡандан һуң башланды.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Быңдай хәлгә ҡалыуыбыҙҙа иң тәүҙә үҙебеҙ ғәйепле, тип уйлайым. Элек-электән мине колхоздарға, ғөмүмән, ауыл ерендә хеҙмәт итеүселәргә ҡарата булған кире мөнәсәбәт аптырата. Нимә ул колхоз? Ул күмәкләп хужалыҡ итеү механизмы. Уны крәҫтиән хужалығы, артель, бергәләп ер эшкәртеүсе ширҡәт йә булмаһа, ассоциация тип ата, эш бит уның исемендә түгел, ә есемендә. Беҙгә колхоздарҙы кире тергеҙергә кәрәк, тергеҙмәһәк, ауылдар ҙа, халыҡ та донъя буйлап таралып бөтәсәк. Ауылда эш булмаған, тиҙҙән ундағы мәктәптәргә лә уҡырға барырлыҡ балалар ҡалмай, мәктәптәр ҙә ябыласаҡ һәм ауылдарҙағы һуңғы "усаҡ" һүнеү менән унда кеше ҡалмауы бар.

Әле килеп, һуңғы 20 йыл эсендә колхоздарҙың барлыҡ мөлкәтен, малдарҙы, техниканы, һарайҙарҙы, складтарҙы ватып-емереп, һатырлығын һатып, юҡҡа сығарҙылар. Элекке колхоздарҙа 300 баш һауын һыйыры булһа, 30 баш ҡына ҡалған, элек совхоздарҙа 40-лаған мең баш һарыҡ булһа, хәҙер береһе лә юҡ.

Беҙгә кисекмәҫтән ситтә йөрөгән егеттәрҙе ҡайтарып, колхоздарҙы киренән аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Мин ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуҙың башҡа юлын күрмәйем. Һәр районда үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алған, үҙенең пай ерендә иген, йәшелсә-емеш үҫтергән, күп итеп мал тотҡан, техникаһы булған бынамын тигән фермерҙар бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре туғанлыҡ принцибы буйынса ойошоп эш итә. Был да үҙенә күрә бәләкәй генә колхоз. Күмәкләп эшләүҙең ыңғай өлгөһө бихисап. Башҡаларға ана шундайҙарға эйәрергә генә ҡала.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Һеҙ колхозды ауылдағы иң дөрөҫ хужалыҡ итеү формаһы тип әйтәһегеҙ. Шулай булғас, ниңә улар тарҡалып юҡҡа сыҡты һуң?**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Колхозды төҙөгән ваҡытта баштан уҡ яңылыш юлдан киттек. Сөнки колхоз дәүләт тарафынан сәнәғәт предприятиеһына тиңләнде. Уға Хөкүмәт тарафынан хеҙмәт планы төҙөлдө, күтәрә алмаҫлыҡ йөкләмә-задание бирелде, шул уҡ ваҡытта йыйылған уңыш һуңғы бөртөгөнә тиклем тартып алынды. Дөрөҫөн әйткәндә, колхозсыға тырышып эшләү стимулы юҡҡа сыҡты. Ә ниндәй колхоз кәрәк ине һуң беҙгә? Колхозды ойоштороусылар уның Уставын үҙҙәре яҙып, үҫеш йүнәлештәрен үҙҙәре билдәләргә тейеш ине. Ерҙәргә нимә сәсеү, ниндәй мал тотоу, килемде нисек бүлешеү кеүек мәсьәләләр колхоздың үҙ ихтыярына ҡалдырылһа, бөгөн беҙҙә колхоздарҙан да байыраҡ ойошмалар булмаҫ ине. Юғиһә, беҙҙә игенселек менән шөғөлләнергә шарттары булмаған урманлы-таулы райондарға игенселекте көсләп таҡтылар. Йәки булмаһа, биш йылдың өс йылы ҡоро килгән Урал аръяғы райондарында меңәр баш йылҡы малы тотоп, ит, ҡымыҙ етештереү урынына уларҙы игенселек менән шөғөлләнергә мәжбүр иттеләр.

Йомғаҡлап әйткәндә, колхоздың үҫеш йүнәлеше тулыһынса колхозсылар ҡулында булырға тейеш. Совет осоронда колхоздарҙың был йәһәттән бер ниндәй ҙә хоҡуҡтары булманы. Үҫтерелгән иген, етештерелгән һөт, ит, тире ситкә осоп торғас, колхозсыға үҫеш өсөн бер ниндәй ҙә стимул ҡалманы. Беҙҙә шул саҡтан алып колхоздарҙың насар образы барлыҡҡа килтерелде. Шуның өсөн дә беҙ колхоздарға, иҫкелек ҡалдығы күреп, ҡаршы сығабыҙ. Беҙ колхоз системаһын тейешле итеп күҙ алдына килтерә алмайбыҙ, сөнки уны боҙҙолар. Мин совет власын әрләмәйем, уның етәкселәрен, системаһын тәнҡитләйем. Әлбиттә, планлы система - ул ҡеүәтле механизм, әммә беҙ уны дөрөҫ файҙаланманыҡ.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Ә бына хәҙерге шарттарҙа күмәк хужалыҡтарҙы ойоштороуҙы һеҙ нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Ҡабатлап әйтәм: ауылды һәм милләтте һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы - колхоздарҙы тергеҙеү. Мин элекке һымаҡ эреләтелгән колхоздар кәрәк, тип иҫәпләмәйем. Ҙур ауылдарҙа 2-3 колхоз булыуы ла ихтимал. Колхоздарҙы ойоштороу механизмы нимәнән ғибәрәт һуң? Беҙ әле ерҙәрҙе пай рәүешендә халыҡҡа таратып бирәбеҙ. Һәр бер кеше үҙенең ер участкаһын эшкәртә алмай. Был мөмкин дә түгел. Шуның өсөн, 30-сы йылдарҙа ауыл кешеһе үҙенең дисәтинә-дисәтинә ерҙәре, аты-ҡамыты менән нисек колхозға ингән булһа, хәҙер ҙә таратылған пайҙарҙы бергә ҡушып, улар күмәк хужалыҡҡа ойоша ала. Пенсионерҙарға, инвалидтарға, күмәк хужалыҡта эшләй алмаусы башҡа һөнәр эйәләренә үҙҙәренең пайы өсөн уңыштан өлөш бүлеп бирелергә тейеш. Район кимәлендә лә бөтә ауылдарҙың ер пайҙарын берләштергән үҙәкләштерелгән бер ойошма булыуы мотлаҡ, мәҫәлән, хәҙерге райондарҙың ауыл хужалығы идаралығы тибында. Был ойошманың бурысы: ер пайҙарын берләштереү, рациональ файҙаланыу процесын күҙәтеү һ.б. Бындай ойошма ни өсөн кәрәк? Сөнки ер - халыҡ байлығы, шуға күрә ул кешегә пай итеп бирелгән хәлдә лә уны уңға-һулға һатырға-таратырға юл ҡуйырға ярамай. Айырым бер кеше үҙенең ерен һатырға уйлаған хәлдә лә ул пайын күмәк хужалыҡҡа һатырға тейеш. Беҙҙең атай-олатайҙар быуаттар буйына ер өсөн һуғышҡан, тыуған еребеҙ уларҙың ҡаны менән һуғарылған. Бөтә бәлә шунда: беҙ шул ерҙә йәшәйбеҙ, тик ул ер менән ни эшләргә белмәйбеҙ.

Әбйәлил районын ғына ҡарайыҡ. Унда бөгөн кемдәр генә юҡ. Был район ерендә Магнитогорск халҡы ғына түгел, Кавказдан да, Европа илдәренән дә, океан аръяғынан да килеп ер һатып алып, йорттар һалыусылар бар. Былар барыһы ла урындағы халыҡтың көн итеү мөмкинлеген (сабынлыҡ, көтөүлек, утын әҙерләү, еләк йыйыу, күл буйында ял итеү, һыу инеү) ҡыҫырыҡлау иҫәбенә башҡарыла.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Ниңәлер беҙҙә ергә "мотлаҡ иген сәсеү майҙаны" тип ҡарау бар. Етмәһә, урындағы етәкселәр пайсыларҙы: "Әгәр ҙә ерегеҙҙе эшкәртмәһәгеҙ, унда иген сәсмәһәгеҙ, тартып аласаҡбыҙ",- тип ҡурҡыта. Мәҫәлән, бына һеҙ әйткән Урал аръяғында, биш йылдың өс йылында ҡоролоҡ арҡаһында уңыш бирмәй икән, ниңә ул ерҙәрҙә мотлаҡ иген сәсергә? Мәҫәлән, унда малсылыҡ, әйтәйек, йылҡысылыҡ, һарыҡсылыҡ, һөтсөлөк, умартасылыҡ йә йәшелсәселек (баҡсаларҙы һуғарырға була) буйынса ла колхоздар ойоштороп булмаймы? Әгәр ҙә колхоз малсылыҡ буйынса махсуслаша икән, был осраҡта етерлек кимәлдә һоло, арпа ғына сәсергә мөмкин. Ни өсөн тигәндә, кеше бөгөн "колхоз" тигәндә, уның мотлаҡ тракторы, мотлаҡ сәскесе, мотлаҡ комбайны булырға тейеш, тип уйлай һәм колхозды кире тергеҙергә атлығып тормай. Совет осоронан килгән инерция буйынса хәҙер ауыл кешеһе ҡасандыр һөрөлгән ер мотлаҡ сәселергә тейеш тип уйлап яңылыша, минеңсә.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Ергә мотлаҡ рәүештә иген сәселергә тейешме ни? Түгел. Ерҙә игендән тыш йәшелсә-емеш үҫә, сәсмәһәң дә бесән, ағас үҫә. Үҙемдең туғандарыма: "Һеҙ бит ошо һуғанды, сөгөлдөрҙө, кишерҙе, һарымһаҡты үҙебеҙҙең Һаҡмар туғайында ла үҫтерә алаһағыҙ",- тип әйткәнем бар. Совет осоронда һәр бер майҙанға нимә сәселергә тейешлеге Мәскәүҙә хәл

*✓ Әгәр ҙә беҙ республика кимәлендә колхоздарҙы аяҡҡа баҫтыра алһаҡ, революция яһар инек. Әле беҙҙең ҡулға ошо мөмкинлек бирелгән. Ерҙәрҙе, пайҙарҙы берләштереп, күмәк хужалыҡ төҙөү мөмкинлеге.*



# ТОЙОЛОР ҘА... һуң булыр

ителде, һөҙөмтәлә ошо колхоздарҙы юҡҡа сығарҙы ла инде.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Ә фермер хужалығынан күмәк хужалыҡтың - колхоздың өҫтөнлөгө нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Күмәкләгән яу ҡайтарған, тиҙәр. Ғөмүмән, күмәкләп эшләүгә бер нәмә лә етмәй инде ул. Йәшәйеш тәжрибәһе йәһәтенән дә эреләтелгән хужалыҡ һөҙөмтәле була, икенсенән, һәр пайсы үҙ ерен кәртәләп алып, айырым эшкәртә башлаһа, бындай хужалыҡ өсөн бихисап мәшәҡәттәр килеп тыуыр ине. Өсөнсөнән, техниканы тик ҙур майҙанда ғына һөҙөмтәле файҙаланып була.

Һуңғы ваҡытта инвестициялар йәлеп итеү маҡсатында ситтән килгән кешеләргә өмөт бағлайҙар. Агрохолдингтар, агрокомпаниялар төҙөйҙәр. Инвесторҙар урындағы ауыл тормошон яҡшыртыу маҡсаты менән килмәй бит инде. Улар, иң беренсе нәүбәттә, үҙҙәренең мәнфәғәте менән килә. 90-сы йылдарҙа Сибай, Учалы, Хәйбулла баҡыр ятҡылыҡтарын эшкәртеү буйынса элекке етәкселек сит илдәргә күп мөрәжәғәт итте. Кемдәр генә килмәне беҙгә. Финдар ҙа, немецтар ҙа, американдар ҙа, ҡытайҙар ҙа. Баҡыр рудаһынан ҡырҡлаған элемент алып була. Килеүселәрҙең береһе лә урында завод ҡороп, руданы тулыһынса эшкәртеү мәсьәләһен күҙ уңында тотманы. Әле Сибай, Учалы баҡыр комбинаттарында өс-дүрт кенә төрлө концентрат алына ла, руданың ҡалған составтары Силәбе һәм башҡа өлкәләр заводтарында эшкәртелә. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, улар беҙ һауған һөттөң "ҡаймағын" ала. Ә беҙҙең өлөшкә өңөрәйгән карьер соҡорҙары, ағыуланған бысраҡ һыуҙар, радиациялы һауа тороп ҡала. Мин үҙ ғүмеремдә ситтән килгән инвесторҙарҙың ошоға тиклем беҙҙең мәнфәғәтте ҡайғыртҡанын күргәнем дә, ишеткәнем дә булманы. Улар бер ҡасан да беҙҙең иҡтисадты үҫтерергә ынтылып торманы һәм тормаясаҡ та. Был аңлашыла ла: һәр кем үҙ файҙаһын уйлай. Әгәр ҙә үҙенә файҙа алмаһа, инвесторҙар беҙҙең яҡҡа килмәҫ тә ине.

Агрохолдинг төҙөргә килеүселәр ҙә 18 йылғамы, 49 йылғамы ерҙәрҙе ҡуртымға ала бит инде. Ярай әле, килешеүҙә урындағы халыҡҡа эш биреү мөмкинлеге ҡаралһа. 49 йыл буйына урындағы халыҡҡа мал тотоу мөмкинселеге лә ҡыҫкенләшәсәк. Хәҙер ҡайһы берәүҙәр ауылдарҙа 10-ар баш йылҡы малы тота. Ҡымыҙын да эсәләр, итен дә һаталар. Инвесторҙар килһә, бындай мөмкинселектең юҡҡа сығыуы ла ла бар. Инвестор ауыл халҡына күпме мал тота алаһығыҙ, шунсама тотоғоҙ, тигән лозунг ташламаясаҡ.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Инвесторҙарҙың ниндәй маҡсат менән килеүе билдәле бит инде. 49 йыл - ярты быуатҡа яҡын оҙон ғүмер, 49 йыл үтеүгә кем бар ҙа, кем юҡ. Инвесторҙың төп маҡсаты барыбер ҙә ошо ергә хужа булыу. Әле яңыраҡ ҡына республикабыҙ Президенты Рөстәм Хәмитов арендаға алынған Белорет урмандары буйынса килешеүҙәрҙе өҙөү хаҡында һүҙ алып барҙы. Ерҙе ҡуртымға алған инвесторҙар менән дә шундай уҡ хәл ҡабатланасаҡ. Улар биш йылдың өс йылы ҡоро килгән төбәккә иген сәсергә тип килмәй, әлбиттә.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Мине ауыл халҡының ни өсөн ошондай хәлгә барып төшөүе уйға һала. Меңәр йылдар буйына атай-олатайҙарыбыҙ һаҡлап, ҡанын ҡойған ерҙе ниңә беҙ бөгөн юғалтабыҙ? Ниңә башҡорт үҙ тыуған еренә битараф һуң? Беҙгә ерҙе киләһе быуындар өсөн һаҡлап алып ҡалыу төп бурыс булып тора.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Ер ни өсөн халыҡҡа ҡәҙерле түгел, бының сәбәптәрен нимәлә күрәһегеҙ? Бында, бәлки, колхоз системаһы ғәйеплелер? Сөнки, үҙегеҙ әйтмешләй, был система тейешле йүнәлештә үҫешмәне...**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Юҡ, бында колхоз системаһы ғәйепле түгел, колхоз системаһын боҙоуға йүнәлдерелгән сәйәсәт ғәйепле.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Совет осорона тиклем тыуған ерен йәненән артыҡ күргән башҡорттоң XX быуатта еренән "ситләтелеүенең" сәбәптәрен шул осорҙағы етәкселектең асылда башҡорттар йәшәгән төбәктәргә мөнәсәбәте менән дә аңлатып булалыр. Бына, һеҙ, Мазһар Насип улы, бынан алдағы ошо хаҡтағы һөйләшеүҙә колхоз ауыл ере өсөн иң прогрессив хужалыҡ итеү ысулы һәм совет осоронда башҡорттар йәшәгән райондарҙа колхоздарҙы совхоздарға әйләндереп, халыҡты еренән айырҙылар тип әйткәйнегеҙ. Ә бит республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш райондарында колхоздар әле булһа гөрләп эшләп ултыра. Колхозсылар эш хаҡы ала, йәштәр йорт һала, ауылдары ҙурая.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Дөрөҫ, икенсенән, совет осоронда асылда башҡорттар йәшәгән райондарға етәкселәрҙе ситтән ҡуйҙылар. Урал аръяғында ул ваҡытта урындағы халыҡ вәкиленән берәү ҙә райкомдың беренсе секретары булып ултырманы. Был райондар ситтән килеүсе түрәләр өсөн һуңынан Өлкә Комитетҡа йә тағы ла юғарыраҡ һикерер өсөн трамплин ролен генә башҡарҙы. Был түрәләр урындарҙа күбеһенсә сеймал әҙерләүсе ролен генә үтәне. Урындағы хужалыҡтарҙы үҫтереү хаҡында улар уйлап та бирмәне. Улар хөкүмәткә күберәк тауар тапшырып, орден алды, герой булды. Был саҡта төньяҡ-көнбайыш райондарында урындағы халыҡтан сыҡҡан етәкселәр эшләне һәм улар үҙҙәренең төбәгенең социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләре менән шөғөлләнде. Улар, иң беренсе нәүбәттә, үҙҙәренең колхоздарын совхоздарға әйләндереүгә юл ҡуйманы. Ә көньяҡ-көнсығыш төбәктә Учалы районынан башлап Ейәнсураға, Күгәрсенгә тиклем эре-эре совхоздар төҙөлдө һәм улар баяғы "заготовительдәр" өсөн план үтәү, сеймал оҙатыу конвейеры ролен үтәне. Был хәл махсус эшләнгәнме-юҡмы, стихиялы рәүештә барғанмы, һөҙөмтәһен бөгөн татыйбыҙ: төньяҡ-көнбайышта күп кенә колхоздар һаман да гөрләп эшләп ултыра, ә Урал аръяғы райондары халҡы эш эҙләп донъя ҡыҙыра. Беҙҙең тикшеренеүҙәр буйынса 70-90-сы йылдарҙа көньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнсығыш райондарынан 300 меңләп башҡорт кешеһе ҡырға китергә мәжбүр булған. Быға иң тәүге нәүбәттә колхоздарҙың совхоздарға әйләндерелеүе, бәләкәй ауылдарҙың юҡҡа сығыуы сәбәпсе булып тора. Түбән өлкәһендә йәшәүсе өс кешенең береһе башҡорт иҫәпләнә, бына бит ниндәй хәлгә барып еткәнбеҙ.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Был хәлде беҙ, Мазһар Насип улы, совет власының башҡорт милләтен социаль-иҡтисади ысулдар менән депортациялауы тип тә баһалай алабыҙ. 20 йыл эсендә 300 мең кешенең ситкә сығып китеүен башҡаса атап булмай. Минеңсә, ҡасандыр килеп тарихсылар был күренешкә тап шундай баһа бирәсәк.**

**XX быуаттың урбанизация күренешендә тағы ла бер факторҙың барлығын иҫкә төшөрөү кәрәктер. Ул да булһа - кешенең комфортҡа ынтылышына бәйле тәбиғи халәте. "Красиво жить не запретишь", ти урыҫтар был осраҡта. Һәр хәлдә, комфортҡа, әйтәйек, газлы, йылы һыулы, бәҙрәфле фатирға ынтылыштың урбанизацияға булышлыҡ итеүен инҡар итә алмайбыҙ. Ошо күҙлектән ҡарағанда, совет осоронда республика етәкселегенең көньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнсығыш төбәктәренә башҡа төбәктәргә ҡарағанда иғтибарҙың ҡойто булыуы, әйтәйек, социаль үҫеш өсөн республика ҡаҙнаһынан аҡсаның аҙ бүленеүе асылда башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙе комфорт йәһәтенән артта ҡалдырған да инде. Йәштәр билдәле комфортҡа, ҡалаға ынтылыусан был осраҡта. Данлыҡлы Илеш районының атаҡлы етәксеһе Тәлғәт Рахманов бер осрашҡанда шундай һандарҙы ла килтергәйне: ҡайһы бер йылдарҙа, әйтәйек, илештәргә баймаҡтарға ҡарағанда социаль үҫеш өсөн 40 тапҡырға күберәк аҡса бүленгән. Дөрөҫөн әйткәндә, совет осоронда уҡ көнбайыш районларының комфорт мәсьәләһе ошо юл менән хәл ителгән. Тимәк, хәҙерге Баймаҡтың социаль-иҡтисади хәле был йәһәттән бик ябай аңлашыла.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Быны махсус рәүештә үткәрелгән сәйәсәт һөҙөмтәһе тип баһаларға мөмкиндер. 60-сы йылдарҙан алып 90-сы йылдарға тиклем, мәҫәлән, Урал аръяғы, төньяҡ-көнсығыш райондарында бер социаль объект та, бер мәктәп тә, бер клуб та, бер мәҙәниәт йорто ла республика ҡаҙнаһы иҫәбенә төҙөлмәне. Бындай төҙөлөштәр барыһы ла хужалыҡ иҫәбенә, йәғни колхоз-совхоздарҙың ярҙамы менән алып барылды. Хәтерегеҙҙә булһа, тап шул осорҙа үткән уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләрендә колхоз рәйестәрен, совхоз директорҙарын мәктәп төҙөгән өсөн Маҡтау грамотаһы менән бүләкләй торғайнылар.

Ул заманда йыл башында республика бюджетын Юғары Совет раҫлаған саҡта йән башына ҡарап эш йөрөтә инеләр. Был осраҡта Баймаҡ районына ла, Илеш районына ла, халыҡ һанына ҡарап, аҡса тигеҙ бүленде. Әммә төньяҡ-көнбайыш райондарында ҡеүәтле төҙөлөш базалары булыуы арҡаһында бүленгән аҡсаларҙы улар йыл башында уҡ файҙалана инеләр. Ә Урал аръяғында һәм төньяҡ-көнсығыш төбәктә бындай ҡеүәтле базалар булмауы арҡаһында бүленгән сығымдар файҙаланмайынса ҡалып, улар йыл аҙағында автоматик рәүештә төньяҡ-көнбайыш, көнбайыш һәм башҡа райондарға күсерелде. Илешкә һәм башҡа райондарға Урал аръяғына ҡарағанда 40 тапҡырға күп бүленеүе тигән күренеш ошо рәүешле барлыҡҡа килде лә инде.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Уларҙы, йәғни Урал аръяғы райондары етәкселәрен ауыҙына һалғанды йота белмәгәндәр, тип тә әйтергә була бит был осраҡта.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Улай түгел, улар бүленгән аҡсаны файҙаланыр ҙа ине, әммә һис юғы бер кирбес заводы ла булмаған төбәктә был аҡсаны файҙаланырға нигеҙ булманы. Ә нигеҙҙең булмауын әлеге лә баяғы республика етәкселегенең Урал аръяғына иғтибары булмауы менән аңлатырға була.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Совет осоронда колхоздарҙы совхоздарға әйләндереүҙә, бәлки, Урал аръяғы райондарында бик йыш ҡабатланып торған ҡоролоҡ факторы менән дә аңлатып булалыр? Әйтәйек, ҡоролоҡ арҡаһында колхоз табышһыҙға әүерелә һәм уға дәүләт ярҙамы күрһәтеү маҡсатында колхоз совхоҙға әйләндерелә. Шулай түгелме?**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Эйе, колхоздарҙың совхозға әйләнеүендә, бәлки, был фактор ҙа роль уйнағандыр. Әммә был шарт тик Урал аръяғы райондары өсөн генә үтәлә. Ә бына дым да, йылылыҡ та етерлек Ейәнсура, Күгәрсен, Мәләүез яҡтарында совхоздар барлыҡҡа килеүен был фактор менән аңлатып булмай барыбер. Совхоздар был төбәктә ҡырҙан килгән етәкселәргә еңел булһын өсөн дә эшләнгән. Уларҙың эшмәкәрлеге хөкүмәттән аҡса һорап ятыуға ҡоролдо.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Хәҙерге ваҡытта фермерҙар һәм колхоздар өсөн иң ҙур проблемаларҙың береһе - сәсеү майҙандарының малдан тапатылыуы тора. Фермерҙар һәр бер сәсеү майҙанына берәр объездчик та ҡуйып ҡарай, сәселгән ер барыбер тапала.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Был проблема һәр ваҡыт булды һәм, әйтергә кәрәк, совет осоронда колхоз системаһы баҫыуҙарҙы малдан тапатыуҙан үҙе һаҡланы. Баҫыуҙарҙы, сабынлыҡтарҙы һаҡлау - күмәкләп башҡарыла торған эш. Әгәр ҙә күмәк хужалыҡта эшләүсе һәр кем баҫыуҙа үҫеүсе игенде үҙенең мөлкәте итеп күрһә, уның тапалыуына, әләф-тәләф ителеүенә юл ҡуймаҫ ине барыбер. Һәр хәлдә, үҙенең малын ебәрмәҫ ине. Мөлкәткә ҡарата булған мөнәсәбәт үҙе һаҡлаясаҡ баҫыуҙарҙы. Баймаҡ тәжрибә хужалығы директоры Илшат Ситдыҡов Урал аръяғы зонаһында малсылыҡ, йылҡысылыҡ буйынса хужалыҡтар төҙөү яғында. Мин уның был фекерен хуплайым. Был зонала иген үҫтереүҙән баш тартмаған хәлдә лә, төп иғтибарҙы малсылыҡҡа йүнәлтергә кәрәк.

**Ә. ҮТӘБАЙ: Сәғит Агиш "Нигеҙ" романында колхозды "күмхуж" тип атағайны. Минеңсә, колхоз һүҙендә лә, күмхуж һүҙендә лә, артель һүҙендә лә берләшеү идеяһы ята.**

**М. ИҪӘНБАЕВ:** Тап шулай. Сөнки беҙ упҡынға төшөп барабыҙ. Әгәр ҙә беҙ республика кимәлендә колхоздарҙы аяҡҡа баҫтыра алһаҡ, революция яһар инек. Әле беҙҙең ҡулға ошо мөмкинлек бирелгән, кем белә, бәлки, һуңғы мөмкинлектер. Ерҙәрҙе, пайҙарҙы берләштереп, күмәк хужалыҡ төҙөү мөмкинлеге. Һуңынан, төрлө юлдар менән ерҙәребеҙ ситтәр ҡулына күсһә, теләһәк тә быны эшләй алмаясаҡбыҙ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ер иң тәүҙә милләтте йәшәтә, һыйындыра, туйындыра торған урын. Бының өсөн милләт вәкилдәре ошо ерҙә ойошоп, бергәләшеп йәшәргә бурыслы. Айырылғанды айыу ашай. Донъяла көн итеү маҡсатында ойошҡан берәмектәрҙән дә ойошҡаныраҡ сара юҡ. Мазһар Насип улы был сараны милләтебеҙҙең сәңгелдәге булған ауылдарҙа колхоздарҙы-күмәк хужалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыуҙа күрә һәм уны әлеге шарттарҙа берҙән-бер сара тип атай. Йә, кемдәр ауылдарҙа колхоздарҙы аяҡҡа баҫтырыу милләтте һаҡлау өсөн дөрөҫ булмаған сара икәнлеген иҫбат итер икән?**



**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

КИТАБЕННАС

## ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

36
Әсәһенең ҡарашында
Бала һәр саҡ өмөт күрер.
Балаһына ризыҡтарын
Ауыҙынан өҙөп бирер.

Ҡуйыны тулы иман ғына,
Күңеле тулы доға ғына.
Кем бурысын әсәһенә
Түләй алған тулы ғына?
Бар хөрмәтең тиңдәш булмаҫ
Әсәнең бер тулғағына.

37
Яратылған ҡатын кәкре ҡабырғаңдан,
Ул кәкрене төҙәтәм тип уй ҡорғанда,
Һаҡ булмаһаң, һыныуы бар.
Сараһы бер - һин йомшаҡ бул ҡатын-ҡыҙға ҡағылғанда.

38
Атаҡайың-әсәкәйең янына саҡырғанда,
Әсәкәйеңдең янына кил һин, кил һин иң алда.

39
Ерҙә, имеш, бер генә лә яҡшы кеше ҡалмаған -
Быны әйткән бәндә үҙе аламанан алама.

40
Тыныс булғандар отҡанда,
ҡаушағандар отолор,
Ашыҡмай, уйлап эшләгән
бәләләрҙән ҡотолор.

41
Һуңлап торған, ялҡауланып ятҡан
Бәрәкәткә үҙенең юлын япҡан.

42
Ололарҙы оло иткән йәштәр яҡшы,
Йәштәр һымаҡ ҡыланыусы ҡарттар шаҡшы.

43
Урлағанды һатып алһаң һин әгәр,
Гонаһтарың бурҙыҡына бәрәбәр.

44
Күберәк ҡабаланған -
Йышыраҡ хаталанған.

45
Һәр эшкә үҙ юлы илтер,
Йәннәткә юл - ғалимлыҡтыр.

46
Ришүәт биргәндең дә,
Ришүәт алғандың да
Урындары уртаҡ -
Тамуҡтағы утта.

47
Хеҙмәтсеңә торма ҡырын,
Түлә тире ҡатмаҫ борон.

48
Ялағайҙың яп ауыҙын.

49
Йомарт биргән ризыҡ - шифа,
Һаран һораған ризыҡ - яфа.

50
Кешеләрҙе йәлләмәнең,
Кем йәлләһен һине бөгөн?

51
Табындың иң йәмле мәле,
аштың иң тәмле мәле -
иманлы күмәк ҡулдарҙың
ризыҡҡа үрелгәне.

52
Тәрбиәле үҫкән бала - иң бай бала,
Мираҫ итеп тәрбиәне алып ҡала.

53
Рәнйеткәндә ғәфү ҡылһаң,
Һарандарға йомарт булһаң,
Талашҡанға ҡулың бирһәң,
Эшем хаҡ булды тиерһең.

(Дауамы бар).

ҺАБАҠТАР

# Ир һәм ҡатын

Йәшәгән, ти, ҡәп-ҡәҙимге Ир менән Ҡатын. Ире көн дә эштән ҡайтып, телевизор ҡабыҙған, гәзит уҡырға ултырған. Ҡатыны ашарға әҙерләгән. Ашарға ултырғас, бисәһе, көндәгесә, ирен игәгән: "Өйҙә бер тин ярҙамың юҡ, эш хаҡың түбән, осто-осҡа ялғап йәшәйбеҙ". Ҡатынының мыжыуына күптән күнегеп бөткән ире бер ни өндәшмәгән, эстән генә уйлай торған булған: "Үҙең шамтыр, Мәскәй әбей, өйләнгән саҡта һинән дә сибәр ҡыҙ юҡ ине".

Бер көн ҡатыны ҡый-ғылырҙы сығарып түгергә ҡушҡас, ире теләмәй генә урамға сыҡҡан. Ҡайтып килешләй өй ишеге алдына туҡтап, Хоҙайға ялбарған: "Эй, Аллам, тормошомдоң бер йәме юҡ. Ғүмер буйы шул мыжыҡ, йәмһеҙ бисә менән йәшәрмен ситтән генә ҡатынын күҙәтә башлаған. Һауыт-һаба йыуып торған хәләл ефете иренең ҡарашын һиҙеп, әйләнеп ҡараған. Уларҙың ҡараштары осрашҡан. "Юҡ, әлегә бер ниндәй үҙгәреш тә һиҙелмәй", тип һығымта яһаған ир кеше.

Иренең сәйер ҡарашына аптыраған ҡатын, үҙе лә һиҙмәҫтән, сәстәрен төҙәтҡән, сикәләре ҡыҙарып киткән. "Һин нинә улай минә тишә яҙырҙай итеп ҡарайһың?" - тип һораған ҡатын оялып ҡына. Ир ҙә ҡаушай төшкән. "Әйҙә, ярҙам итешәйем", - тигән ул, ахырҙа, үҙ ҡолағына үҙе ышанмай. "Рәхмәт, кәрәкмәй. Мин йыуып бөтөп барам инде", - тигән ҡатыны уңайһыҙланып ҡына. "Бына һиңә, мә! Ҡатыным күҙ менән ҡаш араһында үҙгәрә башланы түгелме?" - тип уйлаған ире һәм ҡатынына ярҙам итә башлаған.

шын сәйнәйҙәр. Иртәгә, шәмбе көнөнә, ниндәй пландарың бар? Бына, театрға ике билет алғайным. Көндөҙ театрға барыр өсөн һиңә күлдәк һайларбыҙ, йәме?" - ир "фәрештәләргә торошло күлдәк", тип әйтергә уйлаған да, ҡатынының һаҙлы ҡарашын күреп, шымып ҡалған.

"Эй, Аллам! Фәрештәләр был тиклем дә гүзәл була икән! Әгәр ҙә ҡатыным күҙгә күренеп үҙгәрһә, мин уға лайыҡлы ир була алырмынмы һуң?" - тип ҡурҡа төшкән ир. Һәм ҡапыл, йәшен атҡандай, мейеһен яңы уй те-



микән? Был бит йәшәү түгел, ыҙа сигеү".

Ҡайҙандыр, ирҙең ҡолағына ғына, Аллаһы Тәғәләнең тауышы ишетелгән: "Был бәләндән ҡотҡарып, һиңә йәш, сибәр ҡыҙҙы йәрәштерергә була. Әммә күршеләрең яҙмышындағы был үҙгәрешкә ышанмайынса, шаҡ ҡатасаҡ. Әйҙә, былай итәйек: әлеге ҡатыныңды яйлап ҡына фәрештәгә әйләндерәм, уның тышҡы ҡиәфәтен дә, эске торошон дә үҙгәртәм, тик һин дә уға торошло булып үҙгәрергә тейешһең".

"Рәхмәт, Аллам. Фәрештә хаҡына бөтөн ирҙәр ҙә үҙ яҙмышын үҙгәртергә риза булыр ине. Тик, зинһар өсөн, әйтә һал, минең ҡатыным ҡасан фәрештәгә әйләнер?"

"Мин уны хәҙерҙән үк яйлап ҡына үҙгәртә башлайым. Һәр минут һайын ул шулай яҡшы яҡҡа үҙгәрә барыр", - тигән яуап алған ир һорауына ҡаршы.

Ир өйөнә ҡайтҡан, диванға һуҙылып ятып, телевизор ҡабыҙған. Тик зәңгәр экрандағы тапшырыуҙарҙың береһе лә күңеленә хуш килмәй икән. Уның тиҙерәк ҡатынындағы үҙгәрештәрҙе күргеһе килгән. Ахырҙа, ул урынынан тороп, кухня яғына килгән, ишек яҡтауына һөйәлеп,

Икенсе көндө ир кеше өйгә ашығып ҡайтҡан. Ҡатынындағы үҙгәрештәрҙе тиҙерәк күргеһе килгән уның.

"Туҡта, әгәр ҙә ҡатыным, ысынлап та, фәрештәгә әйләнһә, уңайһыҙ булыр", тип уйлап, ул юл ыңғайы сәскәләр гөлләмәһе һатып алған.

Өй ишеген асыу менән ир, сихырланғандай, ҡатып ҡалған. Уның алдына байрамса кейенгән ҡатыны йылмайып баҫҡан. Йәш саҡтағылай тулҡынланыу менән ир сәскәләрҙе ҡатынына һуҙған. Ҡатын, ҡапыл ҡыҙарып, керпектәрен елпелдәтеп, сәскәләрҙе алған, күҙҙәрендә йәшлек саткылары балҡып киткән.

"Фәрештә! Ҡалай тиҙ үҙгәргән! Керпектәре былай-алаймы! Фәрештәләр генә шулай баҫалҡы булалыр. Тыштан да, эстән дә бер юлы үҙгәргән дә баһа!" - тип аптыраған ир. Байрамса әҙерләнгән һый тулы өҫтәлде күргәс, ул бөтөнләй шаҡҡатҡан.

Өҫтәл артына ултырғас, ҡатыны ҡапыл һикереп торған: "Гәфү ит, телевизор тоҡандырырға онотҡанмын, бына, яңы гәзиттәр ҙә һатып алғайным". "Юҡ, телевизор ҡарағым килмәй, гәзиттәрҙе аҙаҡ ҡарап сығырмын, уларҙа барыбер көн дә бер үк балыҡ ба-

леп үткән: "Фәрештә эргәмдә саҡта, һуң булмаҫ элек, унан һәм минән тыуасаҡ бала тураһында һорай һалырға кәрәк!"

"Һиңә уйға баттың? Әллә берәй әйтер һүҙең бармы?" - тип һораған ҡатын иренән.

"Әлләсе... Мөмкин булһа... Эйе, ысынлап та, минең йөрәк түрендә һиңә әйтер һүҙем бар... Гүзәл фәрештәм, мин һинән һәм минән тыуасаҡ бала тураһында хыялланам!"

Ҡатыны ире янына килгән. Һөйөү наҙы менән тулған күҙҙәренән тамған күҙ йәштәре алһыу сикәләре буйлап ағып төшкән. Бер көн эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән ҡатын ескә ҡулдарын иренең яурынына һалған...

"Ниндәй илерткес төн булды! Фәрештә эргәһендә әүлиәгә әйләнерлек!" - тип уйлай ир кеше икенсе көн иртәнсәк балаһын балалар баҡсаһына алып барған саҡта.

Исмәгәзәм ИСМӘҒИЛЕВ
әҙерләне.

ӘРМЕ МӘҘӘКТӘРЕ

### Дөрөҫ төркөмләү

Хәрби комиссар бүлмәһенә йәш лейтенант рөхсәт һорап инә лә:

- Иптәш майор, хәрби хеҙмәткә саҡырылғандарҙы командаларға нисек итеп төркөмләргә? - тип һорай.
- Һәр ваҡыттағыса, лейтенант.
- Ул нисек була?
- Ә-ә-ә, һеҙ яңы офицер, белмәйһегеҙ. Ул сағында тыңла: иң аҡыллыларҙы - артиллерияға, аңһыҙҙарҙы - авиацияға, ахмаҡтарҙы - ПВО-ға, алйоттарҙы - танкислыҡҡа, аңралыҡтың сигенә сыҡҡандарҙы - пехотаға!
- Ә белекһеҙ маҡау-минрәүҙәрҙе ҡайҙа ҡуябыҙ?
- Уларҙы - командирҙар составына! Бүленгән төркөмдәр менән кемдер командалыҡ итегә тейеш бит, лейтенант!
- Нәк шулай, иптәш майор!

### Аңһыҙ яуап итә харап

Старшина, ротаны теҙеп ҡуйғас, һалдаттарға һорау бирә:

- Хәбибуллин, минең мундир ниндәй төҫтә?
- Үлән төҫөндә, иптәш старшина! Йәшел!
- Дөрөҫ! Наливайко! Казарма ниндәй төҫтә?
- Таш төҫөндә, иптәш старшина! Һоро!
- Дөрөҫ! Голубков! Минең тештәр ниндәй төҫтә?
- Хәрби күнегеүҙәр һәм парад үткәреү майҙаны төҫөндә, иптәш старшина.
- Дөрөҫ, Голубков! Бына шуға щетка менән мин теште таҙартырға казармаға инәм, ә һин көн буйы әлеге күнегеү һәм парад үткәреү майҙанын, минең таҙартасаҡ тештәр кеүек, ялт иттереп ҡуйырға тейешһең! Башҡаларға ял итергә, Голубковҡа - плацҡа, таралырға!

### Люмин

Рота һалдаттарына прапорщик уң ҡулын юғары күтәреп:

- Ана, ҡарағыҙ, самолет осоп бара, ул люминдан эшләнгән, - тип хәбәр һөйләй башлай.
- Люмин түгел, ә алюмин, иптәш прапорщик! - тип бер һалдат уның һүҙен төҙәтмәксе була.
- Рядовой Хәбиров, алға сыҡ!.. Ятырға - торорға, ятырға - торорға!.. Самолет нимәнән эшләнгән?
- Люминдән...
- Дауам итәбеҙ. Бына әле генә баш осонан люминдән эшләнгән самолет осоп үтте. Уның эсендә едренный бомба ла булыуы мөмкин.
- Ядро бомбаһы...
- Тағы һин әйттеңме? Сыҡ алға! Ятырға - торорға, ятырға - торорға!..

### Дөрөҫ уйлай

- Мин һиңә, һалдат, ҡарап-ҡарап торам да аптырап ҡуям: үтә ныҡ аҡыллыһың!
- Кем, минме?
- Мин түгел инде, әлбиттә!

Риф МИФТАХОВ.

**Башҡорт сәнғәтендә халыҡ йырҙары һәм ҡурай көйҙәре, бейеү ҙә бик әһәмиәтле урын алып тора. Бейеү - халыҡтың үҙен, уның күңел хазинаһын, донъяға ҡарашын сағылдырыусы һығылмалы портрет, тиҙәр. Бейеүсе һөнәре йырсы йәки ҡурайсы һөнәренә ҡарағанда күпкә ауырыраҡтыр ҙа, ни тиһәң дә, моң һәм һүҙ ярҙамында әллә ниндәй бикле күңелдәргә үтеп инергә мөмкин, ә бына тән хәрәкәте, күҙ ҡарашы һәм мимика менән эшләү өсөн айырата таһыллыҡ кәрәк. Телһеҙ шиғриәт, тыңлап ҡына түгел, күреп була торған йыр көйөк ул бейеү.**
**Сәхнәбеҙҙе генә түгел, йәштәребеҙҙең күңелен дә сит халыҡ бейеүҙәре яулай барған саҡта, башҡорт бейеүе үҙенең асылын һаҡлап ҡала алырмы һуң? Бөгөнгә тиклем ҡаҙерләп һаҡланып килгән был сәнғәт төрөнөң киләсәктә үҙ тамашасыһы булырмы? Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Сибай" бейеү ансамбле бейеүсеһе Фәйзулла ҒӨБӘЙҘУЛЛИН менән әңгәмәбеҙ башлыса ошолар һәм башҡорт халыҡ бейеүенең үҙенсәлектәре, уның киләсәге тураһында барҙы.**

# ТЕЛҺЕҘ ШИҒРИӘТ УЛ...

## башҡорт бейеүе

### Яҙмышыма яҙғаны...

Кеше тыуғанда уҡ маңлайына яҙмышы яҙылған була, тиҙәр. Моғайын да, сабыйҙың киләсәктә ниндәй һөнәр эйәһе буласағы ла шул ваҡытта уҡ билдәләнәлер ул. Бына миңә бейеүсе булырға яҙған. Шулай булмаһа, мин был эшемдән шундай оло кинәнес ала алыр инемме лә, һөнәремде яҙмышым итеп, бер һүҙһеҙ ҡабул итә алыр инемме?

Бәләкәй саҡта мин бейеүсе булырмын тип уйламағайным да. Һәр кеше кеүек, мәктәптә төрлө байрамдар ваҡытында бейей инем, әлбиттә. Шулай ҙа сәхнә үҙенә ғашиҡ итеп өлгөргәйне. Тыуғыҙнысы синыфҡа тиклем тыуған ауылым - Баймаҡ районы Байыш ауылында белем алдым да, Стәрлетамаҡҡа мәҙәниәт-ағартыу техникумына актерлыҡҡа уҡырға киттем. Тәүге курсты махсус Стәрлетамаҡ театры өсөн йыйҙылар. Осраҡлылыҡ булдымы икән, Стәрлетамаҡта ошо уҡ йылда бейеү театры асылды. Етәксеһе Хәлил Ишбирҙин ине. Ни өсөндөр, техникумда студенттарға бейеү театрында шөғөлләнергә рөхсәт итмәй торғайнылар. Шуға ла көндөҙ уҡыйбыҙ ҙа, кистәрен баймаҡ егеттәре менән ҡасып ҡына бейергә йөрөйбөҙ. Миңә бейеү ене ана шунда ҡағылды ла инде. Йыл ярым уҡыным, тик шулай ҙа ауыл, атай, әсәй, туғандар һағындыра бит! Бер көн уҡыуымды ташлап, ҡайттым да киттем Байышыма. Өйҙә бер аҙ һукрандылар ҙа тындылар.

Ҡайтыуын ҡайттым да, тик яҙмышыңа бейеүсе булырға яҙғас, унан ҡасып ҡотолоп буламы һуң? Икенсе йылына мине тағы училищеға саҡырып алдылар. Хәҙер инде актерлыҡҡа түгел, ә бейеү бүлегенә барҙым. 1993 йылда мин диплом алдым, ошо уҡ мәлдә Сибайҙа филармония асылды. Сибайҙан атай-әсәй эргәһенә ҡайтып йөрөүе лә унайлы, шуға филармонияға эшкә килергә хәл иттем. Кәләшем - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Эльвира Аҡназарова менән дә Сибайҙа таныштыҡ. Айсыуаҡ исемле ул һәм Әмилә исемле ҡыҙ үҫтерәбеҙ.

### "Ҡара тауыҡ" билдәле итте

Филармония асылғандан алып ансамблдә 8-10, иң күбе - 12 пар бейеүсе бейей. Иң ҡыҙығы - баштан уҡ бейеүселәрҙең 90 процент тирәһе Урал аръяғы райондарынан йыйылғайны һәм уларҙың күбеһенең махсус белеме лә булманы. Кемеһелер ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында уҡыуын тамамлай алмаған, башҡа һөнәр һайлап та бейеп йөрөүселәр булды. Бөгөн Өфө сәхнәләрендә бейегән Рафаэль Сәғитов, Урал Мортазин һәм башҡа бик күптәр "Сибай" бейеү ансамблендә ҡанат нығытты. Ансамбль бейеүселәренән генә түгел, етәкселәренән дә уңды. Ансамблдең художество етәксеһе Гөлназ Аҡназарова, филармония директоры Ринат Ишмуллин, художество етәксеһе Әлмира Ҡыуатоваға бөгөн дә рәхмәтлебеҙ.

1996 йылда тәүге тапҡыр 45 көнгә Францияға гастролгә сыҡтыҡ. Ошо ваҡиғанан һуң ансамбль ныҡлап аяҡҡа баҫты, тип әйтергә була. Был сәйәхәт үҙебеҙгә лә оҡшаны, сит илгә сығып, башҡа милләттәрҙе, уларҙың бейеүҙәрен күргәндән һуң, башҡорт бейеүен дә шундай кимәлгә күтәреү телөге уянды һәм беҙ тағы ла дәртләнеберәк эшкә тотондоҡ. "Уралым бөркөттәре", "Каруанһарай", "Байрам" һәм башҡа бейеүҙәр менән бер рәттән ансамбль репертуарын йылап чечен, мари, татар һәм башҡа милләт бейеүҙәре лә тулыландыра башланы. Әле лә яңынан-яңы ҡуйылған бейеүҙәрҙе сәхнәгә сығарып торабыҙ.

Бәләкәй бригадалар төҙөп, гастролдәрҙә йөрөгәндә яңғыҙ бейеүҙәр ҙә башҡарырға тура килә. Һәр бейеүсенең, бигерәк тә яңғыҙ бейеүсенең, үҙенең иң уңышлы, русса әйткәндә, "коронный" бейеүе була, тамашасы уны тап ошо бейеү аша таный. Йәүҙәт Бикбирҙин ҡуйған "Ҡара тауыҡ", моғайын, минең өсөн ана шундай бейеүҙер. Шул уҡ хореографтың "Генерал Игзаков"ы күңелемә яҡын. Игзаков - тарихи шәхес, ысынбарлыҡта генерал уҡ булмаһа ла, кантон башлығы булған, шуға физик яҡтан уны халыҡҡа еткереүе лә ауырыраҡ. "Ҡараһаҡал", төрлө "Байыҡ"тарҙы ла яратып бейейем. Хәҙер инде репертуарымда ете-һигеҙ яңғыҙ, дүрт дуэт бейеү бар. Ун йәшлек улым мин бейегән бейеүҙәрҙең барыһын да артымдан өйрәнә килә. Балаларымды бейеүсе итмәҫкә ине, тигән теләгем бар ҙа барлыҡҡа. Һуңғы осорҙа өйҙә телевизор, компьютер алдында күп ултыра башлағастар, хәрәкәт булһын, тип, бейеү түңәрәгенә бирергә тура килде. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тип бушҡа әйтмәгәндәрҙер әле. Айсыуаҡ 2010 йылда "Балалар Байығы"нда ҡатнашып, икенсе урын алды. Был конкурсҡа һәләтле балалар күп килә, әммә район-ҡалаларҙа балетмейстерҙар, художество етәкселәре етешмәйме икән, дөрөҫ ҡуйылмаған бейеүҙәр күберәк. Бала өсөн бейеүҙе мотлаҡ уның мөмкинлегенә, һәләтенә ҡарап һалырға кәрәк. Тәбиғәте менән лирик бейеүсегә - дәртле, дәртле бейеүсегә лирик бейеү һалыу яңылыш эш. Араларында билдәле бейеүҙәрҙе боҙоп ҡуйыусылар ҙа бар.

### Рәсмиләштереү мөһим

Бөгөн бейеү сәнғәте ниндәйҙер торғонлоҡ кисергән кеүек тойола башланы. Ф. Гәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле лә башлыса элекке бейеүҙәрҙе бейей. Халыҡ бик яратып ҡараған "Байыҡ" телевизион конкурсы яңы һәләттәр асып, бейеү сәнғәтен ниндәйҙер бер бейелеккә күтәрер, тигән өмөтөм дә аҡланманы. Тегенән-бынан урлаған элементтар менән бейеү һалған фантазияһыҙ кешеләр сәнғәтте үҫтерә алмай инде ул. Ә шулай ҙа был конкурсты дауам итергә кәрәк.

Филармонияларҙа ла бейеү үҫеше туҡтап ҡалды. Тамашасы хәтерләйҙер әле, бишь-алты йыл элек Стәрлетамаҡта Риф Ғәбитов, Сибайҙа Гөлназ Аҡназарова, Нефтекамала Рифҡәт Саттаров эшләгән саҡта ниндәй шәп бейеүҙәр ҡуйылғайны. Шул саҡтарҙа ла Өфөгә концерт ҡуйырға килә торғайныҡ. Беҙ, мәҫәлән, аттар бейеүе бейейбеҙ икән, нефтекамалар ҙа бейей, әммә был бейеүҙәр бер-береһенә бөтөнләй оҡшамай ине. Хәҙер бейеүҙәр күп осраҡта бер тамсы һыу кеүек оҡшаш, бары тик музыкаһы ғына башҡа. Шунан



ниндәй үҫеш тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин булһын?

Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе тарайтырға ла тейеш түгелбеҙ. Мәҫәлән, йүгереп бейегәндә саҡ ҡына шәп китә башлаһаң, был беҙҙеңсә түгел, тиҙәр. Кем әйтә әле ул хәрәкәт башҡорт бейеүендә юҡ тип? Бар ул хәрәкәт беҙҙә, тик асыҡларға кәрәк, шунда ғына башҡорт бейеүе үҫешәсәк. Бөгөн Ирланд стебы бик билдәле бит инде, бөтә донъя уларҙы йығылып ятып ҡарай. Риф Ғәбитовтың "Ирландтар был бейеүҙе беҙҙән сәлдергән бит", тигән шаярыуында ла нигеҙ бар, улайға китһә. "Байыҡ" бейеүенең тәүге хәрәкәттәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ ҙә, уларҙы шәп-шәп итеп эшләп ҡарағыҙ - Ирланд стебы килә сыға! Тимәк, ҡайһы бер хәрәкәттәрҙе, ул башҡа милләткә, тип кенә бейеүҙәрҙән төшөрөп ҡалдырырға ярамай. Шулай уҡ башҡорт бейеүендә мотлаҡ аяҡ тыпырлатыу булырға тейеш. Халҡыбыҙ бит ҡайғырғанда ла, шатланғанда ла бейегән. Хатта лирик бейеүҙәрҙә лә ниндәйҙер хәрәкәттәрҙән һуң дроп яһап, эсендәге йә кире, йә ыңғай энергияңды сығарып ҡуяһың. Был -беренсенән. Икенсенән, тыпырлау күңелдә ниндәйҙер рух күтәренкелеге, йөклап ятҡан тойғоларҙы уятыу һәләтенә эйә. Һуңғы осорҙа күп бейеүҙәр балет элементтарынан тора, йәнәһе, шул рәүешле башҡорт бейеүен классик кимәлгә күтәрәләр. Әммә унда тыпырлау ишетелмәгәс, уны хатта башҡорт бейеүе тип ҡабул итеүе лә ауыр.

Ансамблдә бейеү менән бер рәттән, БДУ-ның Сибай институтында бейеү буйынса өҫтәмә дәрес алып барам. Музыка уҡытыусыһы мәктәпкә эшкә барғас, исмаһам, ритмика уҡытырлыҡ белеме булырға тейеш, сөнки бала бәләкәй саҡтан уҡ дөрөҫ бейергә өйрәнмәһә, аҙаҡ уны төҙәтеүе ауыр була. Әҙер балсыҡ көршәкте кире төҙәтеп булмай, уны балсыҡ хәлендә уҡ дөрөҫ әүәләргә кәрәк. Студенттарҙ уҡыта башлағас та бейеү буйынса махсус терминдар эшләнмәгәне асыҡланды. Күптән башҡорт бейеүҙәре фондын булдырырға ваҡыт. Теге йәки был бейеүҙе студенттар уҡытыусы-хореограф өйрәтеүендә түгел, лекция вариантын уҡып өйрәнергә тейеш. Лидиә Нагаеваның китаптарынан тыш, башҡорт бейеүе тураһында бер дәреслек тә эшләнмәгән. Хатта "Башҡортостан" ҡыҫҡа энциклопедияһының дөйөм мәҙәниәт һәм сәнғәт тураһындағы бүлегендә бейеү сәнғәте тураһында бер һөйләм дә юҡ. Әйтерһең, башҡорттоң бер ҡасан да бейеүе булмаған! Классик бейеүҙәр, әйтәйек, "Зарифа", "Гөлнәзирә", "Байыҡ" документаль яҡтан күптән ҡағыҙға төшөрөлөп, рәсмиләштерелергә тейеш. Бындай шарттарҙа, исмаһам, бейеүҙәрҙе таҫмаға яҙҙырып алырға кәрәк, сөнки был бейеүҙе һаҡлап ҡалыуҙың бер ысулы. Беҙ өйрәтеп өлгөрмәгән хәрәкәттәрҙе балалар ошо яҙмалар аша булһа ла өйрәнергә һәм мотлаҡ бейергә тейеш.

### Үҙе бер тамаша

Башҡорттарҙа яңғыҙ бейеү ныҡ үҫешкән. Гастролдәр менән сит илдәрҙә, Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә йыш булабыҙ, башҡа милләттәрҙә яңғыҙ бейеү бик һирәк осрай. Беҙҙә иһә Салауат Юлаев, Таһир Күсимов кеүек һәр бер геройыбыҙға махсус һалынған бейеүҙәрҙең бер-нисә варианты бар.

Башҡорт халҡы борондан бейеүҙе теге йәки был байрамға бағышлап ҡына башҡармаған. Әгәр ҙә ниндәйҙер йола башҡарған саҡта ғына, йәки байрамдан байрамға ғына бейеләп йөрөһә, был бейеүҙәр күптән онотолоп бөткән булыр ине. Ергә, утҡа, һыуға табынып йәшәгән башҡорт тәбиғәткә һөйөүен шундай нескә итеп йыр-бейеү аша сағылдырған. Башҡорт бейеүе үҙе бер бәләкәй генә тамаша ул. Унда, мәҫәлән, һунарсының һунарға барыуынан алып, атып алған тиреһен алып ҡайтып һыуанып күрһәтеүенә тиклем тасуирлап күрһәтелә. Һәр хәрәкәт икенсеһенә бәйле, уларҙың береһен генә төшөрөп ҡалдыр - бейеү шунда уҡ мәғәнәһен юғалтасаҡ. Был - башҡорт бейеүҙәрен башҡа халыҡ бейеүҙәренән айырып тороусы тағы бер үҙенсәлек.

Һуңғы ваҡытта бейеү ҡуйғанда костюмға ла иғтибар итеү көсәйҙе. Башҡортостан территорияһы буйынса бәләкәй генә булыуына ҡарамаҫтан, тәбиғәт үҙенсәлектәренә ярашлы һәр төбәктең үҙенә хас кейеме бар. "Киндер туҡмау" тигән бейеүҙә ҡыҙҙар түбәтәй кейеп, өҫтөнән яулыҡ ябына. Быны күп тамашасы татар кейеме, тип ҡараһа ла, был көнбайыш башҡорттарының костюмы, күлдәктәрҙең еңдәре лә ябыҡ. Ә татар милли костюмының еңе ябыҡ булмай, ул аҫҡа ҡарай киңәйтеберәк теләгә һәм бейегәндә елпелдәп тора. Урман зонаһында йәшәүселәр, гәҙәттә, ҡамсат бүрек кейгән, ә дала халҡында тиреле йөнлектәр ҙа аҙ. Икенсенән, далала атта йөрөгәндә ҡолаҡты елдән һаҡлау өсөн ҡолаҡлы бүрек кейеү күпкә уңайлыраҡ булған. Бигерәк тә Рифҡәт Саттаров костюмдарҙы белеп, бейеүҙәрендә уңышлы ҡуллана. Былар барыһы ла бейеү сәнғәтен генә түгел, ә мәҙәниәтебеҙҙе лә, һис шикһеҙ, байыта.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Япон бейеүсеһе Кадзуо Ононың "Халыҡ бейеүҙәре был халыҡтың төйәк иткән тәбиғәте кеүек уҡ. Тәбиғәт матур һәм бай икән, бейеүҙәр ҙә матур һәм төрлө була" тигән һүҙҙәре бар. Хоҙай биргән ошо байлығыбыҙҙы ситтәрҙекенә алыштырмайыҡ әле, асылыбыҙҙан, тарихыбыҙҙан тайпылмайыҡ. Халыҡ бейеүе кеүек күңелдә бер оло байрам тойғолары уятырға һәләтле башҡа сәнғәт төрө юҡ һәм булмаясаҡ та. Үҙ сәхнәбеҙҙә үҙ халҡыбыҙҙың бейеүҙәрен үҙебеҙ бейемәһәк, башҡалар бейемәйәсәк, шуны гел иҫтә тотоп йәшәйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Әрме хеҙмәтенә барманым, уның ҡарауы әлеге көндә ике балам йүгереп йөрөй. Бәлки, тыуған ил алдында бурысымды үтәйем тип, армияға китһәм, никах сәғәтемде лә үткәреп ебәрер инем.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АҘЫҠТАН БАШ ТАРТЫП...

## үҙеңде бәхетһеҙ итмә

■ Май-яғыулыҡ станциялары һауаны яман шешкә килтереүсе бензол һәм башҡа органик ҡушылмалар менән зарарлай. Эксперттар иҫәпләп сығарыуынса, бындай станциялар һәм улар зонаһындағы һауа яғыулыҡ түгелеп боҫҡа әйләнеүҙән ныҡ бысранған була. Шуға ла сәләмәтлеккә зыян килмәһен өсөн бындай урындарҙан 50-100 метр йыраҡлыҡта йәшәргә кәрәк. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, бында бензиндың сифаты, автомобиль хәрәкәтенең йышлығы, һауа шарттары ла ҙур роль уйнай.

■ Тирене йәш көйө һаҡлап ҡалыу өсөн составына антиоксидант, коллаген кеүек ингридиенттар ҡушылған косметик саралар күптән ҡулланыла. Ә бына коллагенлы аҙыҡ-түлек - бөгөнгө көн өсөн өр-яңы тренд һанала. Японияның ҡайһы бер рестарандарында коллаген өҫтәлгән аҙыҡ тәмләп ҡарарға мөмкин. Был протеин организм тарафынан эшләнеп сығарыла һәм тирене ҡартайыуҙан һаҡлай. "Йәш ҡалыр өсөн аша" тип аталған ғәҙәти булмаған менюға эслек урынына коллаген һалынған һәм коллаген менән ҡапланған татлы икмәк, диңгеҙ ылымыҡтары һәм коллагендан торған салат та инә. Әммә ғалимдар фекеренсә, был яңылыҡтан тире бер ниндәй ҙә файҙа алмаясаҡ. Сөнки коллаген - протеин һәм ул организмда ит һәм балыҡ кеүек үк аминокислоталарға тарҡала.

■ Лос-Анджелестың Cedars-Sinai медицина үҙәге тикшеренеүселәре куркума нигеҙендә яңы препарат уйлап тапҡан. Ул инсульттан һуң тиҙерәк һауығырға мөмкинлек бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, был дарыуҙы ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ҡулланырға ла буласаҡ. Яңы дарыуҙың төп тәьҫир итеүсе матдәһе булып куркумаға сағыу төҫ биреүсе полифенол - куркумин тора. Ул ялҡынһыныуға ҡаршы тора һәм антиоксидант тәьҫиргә эйә. Яңы дарыуҙы инсульт кисергән кешенең организмына өс сәғәт эсендә индереп өлгөргәндә, баш мейеһе күҙәнәктәрен тере килеш һаҡлап алып ҡалырға мөмкин, ти ғалимдар.

■ Теге йәки был ауырыуҙан үҙ белдеге менән дарыу һайлағанда кеше иң тәүҙә препараттың төҫөнә һәм исеменә иғтибар итә икән. Һиндостан ғалимдары әйтеүенсә, кешеләр бигерәк тә ҡыҙыл һәм алһыу таблеткаларҙы һатып алырға тырыша. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 14 проценты алһыу таблеткаларҙы ҡыҙылдарына ҡарағанда татлыраҡ, тип тапҡан. Һары төҫтәге дарыуҙар - тоҙло, ә ҡыҙғылт һарылары әсерәк тойолған.

■ Hershey's компанияһының һуңғы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ҡара шоколадта файҙалы матдәләр ҡара көртмәле йәки мүк еләгенә ҡарағанда ла күберәк. Ғалимдар тәжрибә үткәреү өсөн көртмәле, мүк еләге һәм асаи емештәрен ҡара шоколад менән сағыштырған. Һөҙөмтәлә, какао һәм шоколад антиоксидант төрҙәре - флавоноидтар күләме буйынса беренсе урынға сыҡҡан. Медицинала флавоноид организмдың ҡартайыу процестарын туҡтатыусы булараҡ билдәле. Бынан тыш, табиптар әйтеүенсә, шоколадтың еҫе һалҡын тейеү билдәләрен дә еңеләйтеү һәләтенә эйә.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтөн ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Баҡтиһәң, ҡамыр аштары, май, сүпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тулыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр киҫкенләшә.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!



# ЫСЫН ИР-ЕГЕТТӘРҘЕҢ...

## ҡылығы нисек, сифаты ниндәй?

**Әгәр ҙә байрам алдынан урамға сығып, уҙып барыусыларҙан тота килеп: "Кем ул ысын ир-егет?"- тип һораһаҡ, береһе лә баҙап ҡалмаясаҡ. Әммә барыһының да тиерлек яуаптары, моғайын, бер төрлөрәк яңғырар. Ысын ир-егет кешенең кем икәнлеген билдәләп, ул көслө, ҡыйыу, ышаныслы, лидер сифаттарына эйә булырға тейеш, тиерҙәр.**

Ә бит тормошта йыш ҡына бөтөнләй икенсе төрлө килеп сыға. Көслө - үтә агрессивҡа, ҡыйыу - дыуамалға, ышаныслы - үҙенә ныҡ ышанғанға, ә лидер - диктаторға әйләнә. Ә һуңынан ир-егеттәрҙең уртаса ғүмер оҙайлығы кәмей бара, тигән статистик мәғлүмәт күреп аптырашта ҡалабыҙ. Ни өсөн һуң?

Был турала күп кенә фекерҙәр йөрөй, әммә барыһы ла тиерлек "ысын ир-егет" агрессив, теләһә ниндәй уңайлы форсат килеп тыуған осраҡта һуғышырға, бар ерҙә лә үҙенең "текәлеген" күрһәтергә тейеш, һ.б. тигәнгә ҡайтып ҡала. Ә хәҙер ошоға оҡшаш әкиәт һөйләүселәргә бер һорау биргем килә: нисек уйлайһығыҙ, бындай ҡағиҙәләрҙең ауыр баҫымы аҫтында урта статистик ир кеше күпме йәшәр? Бигерәк тә был ҡағиҙәләр шәхес төҙөлөшөнә тап килмәһә? Тап килгән осраҡта ла, улар кешене тағы ла агрессивыраҡ, дыуамалыраҡ булырға дәртләндерһә? Һөҙөмтәлә, ир-егеттәр йәш саҡта уҡ йә һуғышып, йә юл-транспорт ваҡиғаларында үлә, йә илле йәшкә тиклем төрлө яман шеш, йөрәк ауырыуҙары йыйып, "ысын ир-егет образына тап килеүҙән" арый. Былар береһе лә ғүмер оҙайлығын арттыра торған факторҙар түгел.

Көслө заттар тураһындағы ҡалыплашҡан йәмғәтселек фекере ир-егеттәрҙән холоҡ-фиғелдәрендә, үҙ-үҙен тотошонда сиктәргә һыймаған эштәр талап итә, был иһә, улар өсөн даими ауыр стресс тыуҙыра. Ир кеше һәр ваҡыт ниҙер тейеш: үҙ башына мажаралар эҙләргә тейеш, ярышып йәшәргә, эшләргә тейеш, исмаһам, хәүефле спорт төрҙәре менән булһа ла шөғөлләнергә тейеш.

Ул ғына ла түгел, хатта 23 февраль - хәрбиҙәрҙең һөнәри байрамы (шул иҫәптән әрмелә хеҙмәт итеүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың да) яйлап ир-егеттәр көнөнә әйләнде. Сөнки ир кеше яҡлаусы, ә яҡлаусы - яугир, һалдат, ә һалдат - һуғышырға тейеш, тигән фекер тормошобоҙҙа хәҡиҡәт булып нығынды. Һәм был талаптарға тап килеү кәрәк, юғиһә, һин ысын ир-егет түгелһең. Әммә бер үк ваҡытта ир-егеттәрҙе бер ҡасан да тышҡы баҫымдарға буйһонмаҫҡа, уларға ҡаршы торорға өйрәтәләр. Был аңлайышһыҙлыҡ көндәлек стресс сығанағына әйләнә, шунлыҡтан ир кешенең уртаса ғүмер оҙайлығы пенсия йәше менән тап килмәүе ғәжәйеп тә түгел.

Ә шулай ҙа "Ысын ир-егет кем һуң ул?" тигән һорауға кире ҡайтайыҡ. Ниндәй ир-егет ысын? Әгәр ҙә тап ошо һорауға яуап эҙләһәк, бөтә ир-егеттәр ҙә ысын. Тик һәр береһе үҙенсә. Әммә бындай төрлөлөк кемгәлер ауыр тойолор. Шулай булғас, саҡ ҡына ябайлаштырайыҡ. "Ысын ир-егет" - барлыҡ стереотиптарҙан арынырға һәләтле кеше. Ул йәмғиәт талаптарына бер һүҙһеҙ генә буйһонмай, ә һәр ваҡыт үлсәп, баһалап, анализлап үҙ ҡарарын ҡабул итә; йәмғиәт тураһындағы ҡараштарын үҙ мәнфәғәттәренә ярашлы адекват алымдар менән яҡлай; фекерләй белә һәм унда ниндәйҙер кимәлдә эгоизм да бар. Сөнки ғәҙел, көслө булыр өсөн, үҙеңдең хәүефһеҙлегеңде ҡайғыртырға, ғүмереңде уйларға кәрәк. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, тап ошондай ир-егеттәр күп осраҡта яҡындарын да арыу ғына ҡайғыртып алырға һәләтле була.

Кемдер, моғайын, ундай ир-егеттәр булмай, тиер. Әммә мин уларҙы ваҡыты-ваҡыты менән осратып торам... Үҙ кабинетымда. Сөнки күптән инде "Ир кешегә психотерапевт янына барып илау килешмәй", "Көслө кеше үҙ алдына ҡуйылған мәсьәләләрҙе үҙе сисергә тейеш" тигән фекерҙәр артта ҡалды. Хәҙер психотерапевт янына килеп иламайҙар, ә алдарына ҡуйылған маҡсаттарына өлгәшеү өсөн дөрөҫ юл эҙләп, фекер алышыу өсөн киләләр.

Әммә нисек кенә булмаһын, бөгөн бит байрам. Ә байрамдарҙа яҡшы әйберҙәр хаҡында һөйләргә кәрәк. Һәм бына ҡыуандырырлыҡ хәбәр: йәмғиәтебеҙҙә әле аныҡ фекерләүсе көслө заттар бар. Улар ысын ир-егет образына үҙ критерийҙарына ярашлы ике төп сифат өҫтәй: ысын ир-егет "аҡыллы һәм логик фекерләй белеүсе" һәм тағы "үҙ ҡарарҙарын уйлап ҡабул итеүсе һәм улар өсөн яуап биреүсе" кеше. Тимәк, йәмғиәтебеҙгә бөгөн тап ошондай ир-егеттәр кәрәк һәм улар беҙҙә бар.

**Николай НАРИЦЫН,**
**врач-психотерапевт,**
**психоаналитик.**

ӘЙТӘГҮР!

# ӘРМЕ МӘКТӘБЕН ҮТМӘГӘНДӘР...

## егет буламы?

**Мәктәп йылдарында малайҙар ихлас итеп: "Һалдат шинелен киймәгән егет егет буламы?" - тип йырлай ине. Йылдар үтә, йырҙар ҙа үҙгәрә, ҡасандыр һалдат булып илен һаҡларға теләгән малайҙар, үҫеп еткәс, баласаҡ хыялдарын ҡырҡа үҙгәртә. Ә һеҙҙең әрме хеҙмәтенә барғығыҙ киләме?**

**Булат Заһиров:** Мин армиянан ҡурҡам, барғым да килмәне һәм барманым да. Аныҡ ҡына ниҙән ҡурҡҡанымды әйтә алмайым, бәлки, ғүмеремдең бер йылын ҡайҙалыр, кемдәрҙер менән бушҡа әрәм итергә ҡурҡамдыр. Әрме хеҙмәтенең ни файҙаһы бар? Бына Америкала теләк буйынса ғына хеҙмәт итәләр, шуға ҡарамаҫтан, уларҙың ҡораллы көстәре беҙҙекенә ҡарағанда күпкә ҡеүәтлерәк. Хәҙер егеттәр армияға барырға бик атлығып тормай. Ата-әсәйҙәр ҙә, хатта һөйгән ҡыҙҙар ҙа "һалдат бутҡаһы ашамаған егет егет буламы?" тимәй, үҙең ҡара, тиҙәр. Беҙҙең ғәҙәти тормош та әрме хеҙмәтенән бик айырылмай тиер инем, күпселек иртәнге туғыҙҙан киске алтыға тиклем аҙнаһына биш көн баш баҫып эшләй. Шул уҡ көн тәртибе, шул уҡ гражданлыҡ йәмғиәте ҡағиҙәләре, әгәр ул ҡағиҙәләрҙе үтәргә теләмәйһең икән - штраф санкциялары...

**Илшат Бәширов:** Үҙем әрме хеҙмәтендә булмаһам да, мотлаҡ армияға барып ҡайтырға кәрәктер, тип уйлайым. Егеттәрҙе сыныҡтырыуы, характерын нығытыуы, тормошҡа ҡарашын үҙгәртеүе, үҙенә күрә тормош мәктәбе булыуы менән әһәмиәтле ул. Кемдер үҙен ҡайҙа ҡуйырға, үҙен нисек асырға белмәй, эшһеҙлектән интегә, улар өсөн әрме бутҡаһын татып ҡайтыу иң яҡшы мәктәп була ала. Исмаһам, характерҙары нығынып, тәртипкә өйрәнеп, үҙ-үҙҙәренә ышаныстары артып, ысын ир-егет булып ҡайтырҙар.

**Ринат Хәбиров:** Әрме хеҙмәтенә барманым, уның ҡарауы әлеге көндә ике балам йүгереп йөрөй. Бәлки, тыуған ил алдында бурысымды үтәйем тип, армияға китһәм, никах сәғәтемде лә үткәреп ебәрер инем. Халҡыбыҙҙың һанын арттырыу ҙа насар түгел, минеңсә. Әлбиттә, әрме хеҙмәтендә булыусыларҙы ихтирам итәм. Мәҫәлән, мин атайымдың, уның йәштәштәренең әрме хеҙмәте тураһында ғорурланып һөйләгәндәрен иҫләйем. Хатта атайымдың часть байрағы эргәһендә төшкән фотоһы ла бар. Ә мәғлүм булыуынса, бындай бәхет теләһә кемгә бирелмәй. Ундай ҡаҙанышты яуларға кәрәк. Элегерәкке йылдарҙа әрмелә хеҙмәт итеү ғорурлыҡ булһа, хәҙер нисек тә булһа унан тороп ҡалырға тырышалар. Әрме хеҙмәтенән уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡалар икән, бында егеттәр ҙә, уларҙың ата-әсәләре лә түгел, ә система ғәйепле. Сөнки "бабайлыҡ", офицерҙарҙың урлашыуы, юғары командование араһындағы коррупция ябай һалдат йә патриотлыҡ тураһында уйларға ваҡыт ҡалдырмай. Армия үҙенең абруйын, данын юғалтты. Ә юғалған абруйҙы тергеҙеү, ай-һай, ауыр.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ -

## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

**Башҡорт халкының ғорурлығы булған солоҡ ҡорттарының үҙенә генә хас үҙенсәлектәре етерлек. Уларға байҡау яһайыҡ.**



Бал ҡорттарының тәүге үҙенсәлеге - ҡуҫтәрҙең йәшәү майҙанының сиге тап Көньяҡ Уралға тура килеүендә. Дөйөм алғанда, бал ҡорттарының тыуған яғы булып йылы Көньяҡ Азия иҫәпләнә. Шулай ҙа бөжәктәр яйлап яңы ерҙәрҙе үҙләштерә бара. Былдай күсеү нисә йылдарға һуҙылғандыр, әйтеүе ҡыйын. Әммә бал ҡорттары үтә нығыҡышмал булып сыға. Уларҙың һыуыҡ тәбиғәт шарттарына яраҡлаша-яраҡлаша Урал тауҙарына тиклем килеп етә алыуы ла быға асыҡ миҫал булып тора. Шулай ҙа улар ошонда туҡтарға мәжбүр булалар. Ғалимдар раҫлауынса, бейек Урал тауҙары аша ҡуҫтәр башҡа ҡитғаларға осоп үтә алмай. Әммә беҙҙең төбәккә бал ҡорттары ҡасан тәү тапҡыр килеп еткәндер һәм унда күпме йәшәгәндер - был асылмаған сер булып ҡалыр. Сәбәбе - бынан яҡынса йөҙ мең йыл элек Европаның һәм Азияның төньяҡ өлөшө боҙлоҡ аҫтында ҡала. Өйрәнеүҙәр боҙлоҡтоң әле беҙ йәшәгән төбәккә саҡ-саҡ ҡына килеп етмәй ҡалыуын иҫбатлай. Сама менән әйткәндә, уның сиктәре Мәскәү һәм Пермь ҡалалары тирәһенән үтеп китә. Әлбиттә, боҙлоҡтоң тәьҫире эҙһеҙ үтмәй. Әле беҙ йәшәгән төбәктә оҙайлы шартлама һыуыҡтар осоро башлана. Шуға күрә шикләнеүһеҙ әйтергә була: Көньяҡ Уралда боҙлоҡҡа тиклем бал ҡорттары йәшәгән хәлдә лә меңәр йылға һуҙылған һыуыҡ тәбиғәт шарттары уларҙы үлемгә дусар иткән. Был осорҙа бал ҡорто ғына түгел, башҡа күп тереклектәр ҙә ҡырылғандыр.

Ә бына боронғо кешеләргә тере ҡалырға насип була. Ут табырға өйрәнеү, күмәкләп хайуандарға һунар итеү, ошо юл менән аҙыҡ табыу, хайуан тиреләренән йылы кейем тегергә өйрәнеү уларға сатнама һыуыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итә. Һүҙ ыңғайы боронғо кешеләр тураһында яҙып китмәйенсә лә булмаҫтыр, ахыры. Шул осорҙа йәшәүселәр беҙҙең быуынға "бүләк" ҡалдырырға ла онотмаған. Дөнъяға таралған Шүлгән мәмерйәһен күҙ уңында тотам мин. Урындағы халыҡ был мәмерйәне Ташөй тип тә атай. Был мәмерйәлә 15-17 мең йыл элек эшләнгән һүрәттәр һаман һаҡлана. Боронғо рассәм шул осорҙа йәшәгән хайуандарҙы (мамонт, ат, мөгөҙморон, ҡыр кәзәһе, ҡоралай һ.б.) һәм ниндәйҙер абстракт билдәләр төшөргән. Тәүгеләренә улар һунар иткән, итен аҙыҡ итеп ҡулланған, быныһы аңлашыла. Ә бына трапецияға, баҫҡысҡа, өсмөйөштәргә оҡшаш абстракт билдәләрҙең үҙ тәғәйенләнеше һаман асылмаған сер булып ҡала килә. Һүрәткә төшөрөрҙәй булғас, был билдәләр боронғо кешеләрҙең тормошонда мөһим урын алып торғандыр инде. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - Европала палеолит осоронда төшөрөлгән һүрәтле мәмерйәләр бихисап, әммә унда абстракт билдәләр бөтөнләй осрамай. Шуға күрә лә Шүлгән мәмерйәһе уларҙан бер баҫҡысҡа юғарыраҡ тора.

Бал ҡорттарына әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Боҙлоҡтан һуң тап ошо ерҙә икенсе "үҙенсәлек" үҫеп сыға. Йүкә ағасын күҙ уңында тотам мин. Ваҡыт үтеү менән боҙлоҡ бер иреп, бер кире туңдырып яйлап сигенә башлай. Әлбиттә, боҙлоҡ сигенеү менән Көньяҡ Уралда тәбиғәт шарттары ла ҡырҡа үҙгәрә. Иң мөһиме, урмандар яңынан ҡалҡып сыға. Тап ошо осорҙа йүкә ағасы нығыҡ үҫеш алғандыр, тип фараз итә ғалимдар. Ысынлап та, былдай иҫбатлауҙы бер нисек тә кире ҡағып булмай. Үҙегеҙ иғтибар итегеҙ әле. Бөгөн Рәсәйҙең генә түгел, хатта тотош Европаның дөйөм йүкәлектәр майҙанын иҫәпкә алғанда ла уның өстән бер өлөшө (йәғни 33 %-ы) тап Башҡортостан урмандарында үҫә! Был бик төплө дәлил булып тора. Шуға күрә борон-борондан, башҡорт балы, тип әйткән саҡта тап йүкә балын күҙ уңында тотоу бер ҙә ғәжәп түгелдер, минеңсә.

Өсөнсө үҙенсәлек бал ҡорттарының тәбиғәтенә бәйле. Ошоно аңларға тырышайыҡ әле. Минеңсә, солоҡ бал ҡортон һаҡлау тап ошо аңлауҙан башланалыр. Боҙлоҡ сигенеп, йылы көндәр урынлашып, яңынан урмандар үҫеп сыҡҡас, бал ҡорттары был төбәккә кире әйләнеп ҡайта. Шулай ҙа был ваҡытты аныҡ ҡына билдәләп булмаҫтыр. Был хәл яҡынса 8 мең йыл элек булыуы бик ихтимал, тип яҙа ғалимдар. Әлбиттә, кире әйләнеп ҡайта, тип яҙыу үтә ябай килеп сыға. Яңы тәбиғәт шарттарына бал ҡорттары тиҙ арала күнегеп-өйрәнеп китә алмағандыр. Яраҡлашыу бик ҡиммәткә төшкәндер. Был хәл нисәмә мең йылға һуҙылғандыр ҙа нисәмә мең ҡуҫ һәләк булғандыр, әйтеүе ҡыйын. Сөнки, йәйе йылы булһа ла, һалҡын ҡышы менән дан тотҡан ҡырыҫ тәбиғәтле Көньяҡ Урал бал ҡорттарын ҡолас йәйеп ҡаршы алмай. Ул оло һынауға дусар ителә. Әммә ҡуҫтәр ҙә кире сигенергә уйламай - яңы ерҙә ҡунаҡ түгел, ә киренән хужа булып ҡалыр өсөн улар бик нығыҡышмал булып сыға. Бына ошо ваҡытта йәйрәп ятҡан урман киңлектәре бал ҡорттарының төп таянысына әйләнә. Берҙән, ҡарағай, имән, уҫаҡ (һирәкләп ҡарағас) олондарында урынлашҡан тәбиғи ҡыуышлыҡтар ҡуҫтәрҙең ышаныслы өйөнә әүерелә. Икенсенән, зур майҙанды биләгән йүкәлектәр бал ҡорттарын етерлек кимәлдә аҙыҡ менән тәьмин итә. Тора-бара ҡуҫтәр һыуыҡ тәбиғәт шарттарына тамам яраҡлаша. Шуға күрә лә бөгөнгө көндәргә тиклем иң ыңғайлы, ыңҡ сыҙамлы солоҡ ҡорттары ғына килеп етә алған. Хатта иң камил ҡорттар тип өҫтәр инем мин уларҙы. Былар нимәлә сағыла? Улар йәшәйешендәге ике мәлгә генә туҡталып китәйек.

Тәүгеһе - беҙҙең төбәккә яраҡлашҡан бал ҡорттары күпләп ҡуҫ айыра. Шунһыҙ булмай ҙа. Беренсенән, урманда йәшәгән тәбиғи дошмандар (айыу, һыуһар һ.б.) күслә. Икенсенән, ҡыш осоронда ҡуҫтәрҙең ниндәйҙер бер өлөшө төрлө сәбәптәр арҡаһында үлә. Өсөнсөнән, яҙ йылынан һуң килгән ямғырлы һыуыҡ май, июнь башындағы ҡаты ҡырауҙар, йәй уртаһында йүкә сәскә атҡан ваҡытҡа тура килгән оҙайлы ямғырҙар, көҙ көнө иртә килгән һыуыҡ көндәр - былар бары ла күсһеҙ ҡуҫтәрҙе үлемгә дусар итә. Һығымта - тере ҡалыу өсөн бал ҡорттары күпләп күс айырырға мәжбүр. Былдай яраҡлашыу булмаһа, бал ҡорттары үҙҙәре үк яйлап үлеп бөтөр ине.

Икенсе мәл - башҡа тоҡом ҡорттарынан айырмалы рәүештә беҙҙең бал ҡорттары иң егәрлеһе булып иҫәпләнә. Башҡа сара ла ҡалмай шул уларға - йүкә ни бары ике аҙна, уҙа барһа, өс аҙна сәскә ата. Тормош ҡануңдары аяуһыҙ. Ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә етерлек аҙыҡ туплап өлгөргән ҡуҫтәр генә ҡышты имен-аман сығыуға өмөт итә ала. Ҡуҫтәр йүкәлектәрҙең сәскә атыуын көтә һәм бөтә көсөн туплап, ике аҙна эсендә мул аҙыҡ туплап ала. Әлбиттә, йүкәгә хәтлем һәм унан һуң да бал ҡорттары эшләй. Беҙҙең тикшеренеүҙәр буйынса, солоҡ ҡорттары 98 төр үҫемлектән аҙыҡ йыйып, уларҙы һеркәләндерә.

Ошоларҙан башҡа тағы ниндәй үҙенсәлеге булһын ҡорттарҙың, тип әйтер ҡайһы бер уҡыусы. Әммә улар апаруҡ ҡына. Барыһын да бер мәҡәләгә һыйҙырып бөтөп тә булмайҙыр. Миҫал өсөн ҡуҫтәрҙең нисек итеп оя һайлауын килтерергә була. Һәр кем аңлап тора - урманда бер-берећенә оҡшаған ағас ҡыуышлыҡтары булмай. Улар күләме, киңлеге, аҫылыһы, бейеклеге һәм башҡа үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Шуныһы ҡыҙыҡлы - беҙҙең бал ҡорттары шул ҡыуышлыҡтарҙың сифатын билдәләй алырға һәләтле. Әйтәйек, ағас ҡыуышлығының күләме етерлек булып та ҡыртышы үтә йоҡа булһа, ҡуҫ былдай ояны үҙ итмәйәсәк. Улар белә: ҡышҡы һыуыҡ һаҡламаясаҡ ҡуҫте. Шулай уҡ бәләкәй ҡыуышлыҡты ла хушһынмаясаҡтар, барыбер унда етерлек аҙыҡ туплап булмаясаҡ. Тораҡтарының үҙенсәлеген билдәләү һәләтлеге әҙер өйҙәрҙә, умарталарҙа көн күргән бал ҡорттарында яйлап юғалып баралыр, тип иҫәпләйем мин.

Күреп тораһығыҙ, солоҡ ҡорттарының үҙенә генә хас үҙенсәлектәре етерлек. Беҙгә шуны аңлау мөһим: был сифаттар бал ҡорттарының меңәр йылдар буйы тәбиғәткә яраҡлашыуынан килеп сыҡҡан. Бөгөн көнүҙәк мәсьәлә - тәбиғәт бүләк иткән солоҡ ҡорттарын һаҡлау. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был тәңгәлдә борсолорға урын бар.

**Әгләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**
**Бөрйән районы.**

**(Дауамы. Башы 7-се һанда).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Көндәлек ғәмәлдәрегеҙҙе таҙартыу

Беҙҙең быуат уртаһында бер гаваялы Гавая аҡыл эйәләре - кахундарҙың бик күп серҙәрен асып биргән китап яҙған. Нәшриәткә алып барырға тип юлға сыҡҡан авторҙың ҡулынан был ҡулъяҙманы бер эт тартып ала һәм өҙгөсләп бөтөрә. Автор китапты ҡабаттан күсереп яҙа. Әммә карапта сәйәхәт иткәндә ҡулъяҙма тулҡын аҫтында ҡала һәм ҡабаттан юҡҡа сыға. Ул уны өсөнсөгә күсереп яҙа. Шунда ғына ҡулъяҙманы китап итеп баҫтырып сағарырға насип була.

Уға ошоғаса ниәтен тормошҡа ашырырға нимә ҡамасаулаған һуң? Әгәр аңдың юғары кимәлен аңлау дәрәжәһенә етһәгеҙ, быны осраҡлы булмауына, ә ошо серҙе халыҡҡа еткереүгә ҡамасаулау Юғары аңдың хикмәте булыуына инанырһығыҙ. Беҙ әле аҡылды файҙаланыуҙың тейешле кимәленә етмәгәнбеҙ, тип уйлайым.

Ҡасандыр сер булып ҡалған нәмәләр бөгөн сер булыуҙан туҡтай. Боронғо серҙәр асыла. Ҡасандыр аңлашылмаған һабаҡтар аңлашыла башлай. Фән мейене тағы ла һөҙөмтәләрәк ҡулланыу ысулдарын аса. Әммә былар барыһы ла мейенең һул яҡ ярымшарына ғына ҡағыла. Уң яҡ ярымшар һаман эшкә егелмәгән. Беҙ һаман да рухи етәкселек алырға тырышмай, матди тормошҡа табынабыҙ. Әгәр һеҙ уңыш - ул тыуҡҡан энергия һөҙөмтәһе булыуына, ныҡлы ныҡышмалылыҡ барлыҡ өлкәлә лә ярҙам итерене, уңыш өсөн бары тик ялҡытҡыс хеҙмәт кәрәклегенә ышанаһығыҙ икән, был һеҙҙең иректә. Әммә ябайыраҡ юл да бар.

Америка индеецтарының күпселек ҡәбиләләре кешеләрҙең тормошона йоғонто яһаусы Бөйөк рух булыуына ышана. Шулай уҡ улар кешеләр генә түгел, йәнһеҙ предметтар ҙа рухи көскә эйә тип һанаған. Һөҙөмтәлә индеецтар ауыл хужалығында шундай кимәлгә еткән - улар тарафынан йорт шарттарында үҫтереүгә яраҡлаштырылған кукуруз һәм картуф бөгөн бөтөн донъя халҡы рационының яртыһын тиерлек тәшкил итә. Индеецтарҙың дауалаусыларының, шамандарының, ҡанбабаларының бурысы Хоҙайҙан ҡәбиләләштәренә төрлө проблемаларҙы хәл итеүҙә ярҙам һорау булған.

* * *

Әгәр һеҙ урамдағы ябай кешегә, беҙ Аллаға оҡшашбыҙ, тиһәгеҙ, улар һеҙҙән көләсәк кенә. Ә өндәге төш ярҙамында бөтөн нәмәне хәл итеп була. Мейегеҙҙең уң яҡ ярымшарын әүҙемләштереп, һеҙ Илаһ, фәрештәләр һәм башҡа күҙгә күренмәҫ рухи көстәр менән бәйләнеш булдырып, боронғо аҡыл эйәләренә тиңләшәһегеҙ. Көндәлек тормошоғоҙҙо ыңғай фекер йөрөтөүегеҙ, башҡаларға ҡарата изгелек ҡылыуығыҙ, үҙегеҙҙе тағы ла матур ғәмәлдәргә һәм һүҙҙәргә программалау менән таҙартаһығыҙ.

Һеҙ асыҡ булаһығыҙ. Һеҙ матди тормоштоң һул яҡ ярымшарындағы сикләүҙәрҙән сығып, матдилыкты рухиәт менән берләштергән ике ярымшар ҙа эшләгән, сәләмәтлек, байлыҡ, бәхет өлкәһендә сикһеҙ мөмкинлектәр биргән кимәлгә күтәреләһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 21 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Золотой капкан", 5-я серия. Приключения
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Следствие по телу", 3-я серия
00.40 "Певец"
02.50, 03.05 "Убийство школьного президента"
03.00 Новости
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Тайна египетских пирамид"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад". Сериал
12.50 "Маршрут милосердия". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 256-я серия
17.55 "Все к лучшему", 26-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 97-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вчера закончилась война", 9-я, 10-я и 11-я серии
23.45 "Городок"
00.45 "Вести+"
01.05 "Честный детектив"
01.45 "Дон Сезан де Базан". Музыкальный фильм
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Час Волкова". "Котлован". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Погоня за тенью". Криминальный сериал
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "До суда"
02.45 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "Секунда до…"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Раздвоение Агаты"**
**17.30 "Тэмле"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Раздвоение Агаты"**
**00.45 "Музыка на канале"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 22 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Золотой капкан", 6-я серия
22.30 "Любовь в большом городе-2". Комедия
00.10 "Вики Кристина Барселона". Мелодрама
02.00 "Остров". Боевик
04.10 "Грязные мокрые деньги"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 257-я серия
17.55 "Все к лучшему", 27-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 98-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вчера закончилась война", 12-я, 13-я и 14-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Обитаемый остров". Фантастика
02.40 "Мой нежно любимый детектив"
04.25 "Горячая десятка"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Час Волкова". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Погоня за тенью". Сериал
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Заложники дьявола"
